# *Сәхнә сәмләләрҙе саҡыра*

*Туймазы педагогия колледжының*
*башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы*
*Кәримова Г.Я эше тәжрибәһенән*

**Туймазы, 2012**

Йыйынтыkkа Туймазы педагогия колледжының юғары категориялы башkорт теле һәм әҙәбиәте уkытыусыһы *Кәримова Гөлнара Яхъя kыҙының* һуңғы йылдарҙа ойошторған саралары индерелде

***Йөкмәткеһе:***


1. «Йырым йәшәр әле илемдә». Шағир Рәми Ғариповҡа арналған әҙәби-музыкаль кисә....................................................................4
2. Тыуған илдең ҡото – САЛАУАТ. Башҡорт батыры С.Юлаевҡа арналған әҙәби-музыкаль кисә.........................................................8
3. Башҡортостан Республикаһы көнөнә бағышланған әҙәби музыкаль кисә...........................................................................................13
4. Башҡорт яҙыусыһы Т.Ғарипова ҡатнашлығында Туймазы ҡалаһында уҙғарылған китап уҡыусылар конференцияһы сценарийы...............................................................................16
5. Колледжда "Төркөмдәрҙең ижади осрашыуы" кисәһе...................19
6. "Туймазы ере-эшһөйәрҙәр һәм илһөйәрҙәр иле" ҡала һәм район фәнни-практик конференцияһы сценарийы .................................22
7. 52-се төркөмдә Әсәйҙәр көнөнә арналған ата-әсәләр йыйылышы сценарийы ..........................................................................................25
8. "Беҙҙең студент йылдары" гәзите презентацияһы. «Туймазы хәбәрҙәре» гәзитенең баш мөхәррире урынбаҫары Фәзуллина Гәүһәр менән осрашыу......................................................................32
9. Мостай Кәрим шиғриәтенә арналған шиғыр уҡыусылар бәйгеһе сценарийы..........................................................................................*35*

***«Йырым йәшәр әле илемдә»***
***Шағир Рәми Ғариповҡа арналған***
***әҙәби-музыкаль кисә***
***Февраль, 2012 йыл***
***Йыр. «Көкүк»***

- Кеше ғүмере - йәшнәп үткән йәшен, ялт итеп бер балҡый бер балҡый ҙа һүнә. Ошо ҡыҫҡа ғүмер юлын һәр кеше үҙенсә үтә. Берәүҙәр был ерҙә аҙ ғына йәшәп тә үҙҙәренең исемдәрен мәңгеләштереп өлгөрә. Ошондай кешеләрҙең береһе булды — Рәми Ғарипов, Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев премияһы лауреаты.

- Бөгөнгө кисә арҙаҡлы шағирыбыҙ Р.Ғарипов тормошо һәм ижадына арнала. Залға әҙәбиәт, йыр — моң һөйөүселәр, шағир ижадын ихтирам итеүселәр йыйылды.

- Осрашыуҙы «Йырым йәшәр әле илемдә» тип атаныҡ. Ысынлап та, 60-70 йылдарҙа уҡ әҙәбиәттә киң танылған, инде 40-50 йыллап ғүмер үтһә лә һәр йәш быуындың һөйөүен яулаған шағир шәхесе, исеме, рухы оҙон — оҙаҡ күңелдәрҙә һаҡланасаҡ, йәшәйәсәк әле.

- Рәми Йәғәфәр улы Ғарипов 1932 йылдың 12 февралендә Башҡортостандың Салауат районындағы Арҡауылда тыуған. Шағирҙың автобиографияһында шундай юлдар бар: «Атайым Ғарипов Йәғәфәр Мөхәмәтрәхим улы районыбыҙҙың беренсе доброволец — коммунистары менән фронтҡа китте һәм Сталинград янындағы һуғыштарҙа һәләк булды. Беҙ дүрт бала тороп ҡалдыҡ һәм әсәйебеҙ — һалдат ҡатыны Ғәлмәрйәм Хизбулла ҡыҙы беҙҙе бер үҙе үҫтерҙе. Һуғыш ваҡытында уны «Салауат районының комбайны» тип йөрөтәләр. 1942 йылда ул ураҡ ваҡытында бер үҙе ун һигеҙ гектар ерҙең игенен йыйып алды һәм беҙҙең район ҡатындарынан тәүге булып хөкүмәт наградаһы менән бүләкләнде».

- Ғаиләлә иң ҙур бала булған Рәмигә ауырлыҡтарҙың да иң ҙуры төшә. Һуғыш ваҡытында һәм һуғыштан һуңғы йылдарҙа ул аттар көтә, ололар менән бергә бесән саба, урып — йыйыу эштәрендә тир түгә, урман йыға, ярһыу Йүрүҙән буйлап һал ағыҙа. Ҡулы йорт һәм колхоз эштәренән, көрәк — һәнәктән бушаған арала китапҡа тотона, егәрле үҫмер бер ҡасан да ваҡытын бушҡа үткәрмәй. Шағир һуңғараҡ күп кенә шиғырҙарын үҙенең бала сағына, ата һәм әсәһенә, ятраҡан йылғаһы Йүрүҙәнгә бағышлай.

***(«Һөтлөгәндәр» (Хафизова ) ,«Әсәм ҡулдары» (Сирина ), «Бына минең тыуған ер был...»(Динара ))***

- Ун дүрт йәшлек Рәми өфөлә 9-сы һанлы интернат мәктәпктә уҡыуын дауам итә. «Бөгөнгө көндә беҙ уны Р.Ғарипов исемендәге гимназия тип йөрөтәбеҙ». Рәми шул саҡта уҡ белемле булыуы менән айырылып тора һәм уға хөрмәт менән бабай тигән псевдоним тағалар.

- 1950 йылда Башҡортостан Яҙыусылар союзының тәҡдиме буйынса Мәскәүҙәге М.Горький исемендәге Әҙәбиәт институтына уҡырға инә, шунда биш йыл белем ала. Институтта Р.Ғарипов иҫ киткес ҡатмарлы, көсөргәнешле рухи тормош менән йәшәй. Береһенән — береһе ҡыҙыҡлы лекциялар, семинарҙар, күренекле шағирҙарҙың, абруйлы профессорҙарҙың дәрестәре... Ул күп уҡый, донъяға ҡарашын сарлай, әҙәбиәттә үҙенә генә

хас юлды һайлай...Студент көндәлектәренән шағирҙың шулай уk башkорт халkының тарихына, ижадына ла бик ихтибарлы булыуын күрәһең. Халыk йырҙарын, kурай моңон ул гелән тойғоланып тыңлар булған.

***Kурай. Моратшин Ф.***

- Мәскәүҙә уkыған сағында Рәми үҙенең яртыһын, мөхәббәтен, таба. Ул - тегеү фабрикаһында эшләүсе Надя исемле йәш kыҙ. Надежда Васильевна аҙаk Рәмиҙең ғүмерлек тормош иптәше, балаларының әсәһе була. Мөхәббәт шағирға kанаттар kуя, йәшәүгә дәрт өҫтәй, ауырлыkтарҙы еңергә көс бирә.

- Көндәлегендә уның шундай һүҙҙәр бар: «Надя, kатыным минең! Ғүмергә! Бөтә кешеләргә, бөтә донъяға kысkырғым килә Мин бәхетле! Тәүҙә ауыр буласаk. Мин еңел йәшәй белмәйем. Ләкин баш иҫән булһын. Мин эшләргә яратам. Надяны яратам. Юлым еңел түгел. Ләкин ул Надяны kурkытмай.Ул минең яkын дуҫым буласаk.»

***(«Көтмәгәндә шундай kыҙҙар осрай» (Алмаз), “Сәскә йыйғанда” (Азат), “Былай үҙең бик матур ҙа түгел” (Филюс))***

- 1955 йыл. Рәми kатыны менән өфөгә kайта һәм республика гәзиттәрендә әҙәби хеҙмәткәр булып эшләй. Уның ошо йылдарҙа «Таш сәскә» исемле икенсе китабы сыға.

- Һәм бер мәл ул өфөнән үҙенең тыуған яkтарына – Салауат районына юллана. Бында Р.Ғарипов 5 йылдан артыk эшләй: совхозда комсомол ойошмаһы секретары, район гәзите хеҙмәткәре. Бында ул тулы kанлы тормош менән йәшәне: kара танда тороп, баҫыуҙарҙан баҫыуҙарға һыбай елдерҙе, яkташтары менән бергә – сәсеүҙә йоkоһоҙ төндәр үткәрҙе, kыҫkаһы, игенсенең һөйөнөстәре һәм көйөнөстәре менән йәшәне, шуларҙан илһамланып яңы шиғырҙар тыуҙы. Тыуған ер, хеҙмәт, тәбиғәт хаkында ине улар.

- Шағир ижадында тәбиғәт тураһындағы шиғырҙары бихисап. Тормоштағы һәм тәбиғәттәге һәр хәрәкәттән, һәр биҙәктән үҙенсә йәм һәм мәғәнә таба, кеше күңелендәге һәм сәскә kарашындағы ихласлыkkа, матурлыkkа табынып йәшәй. Бөркөт, кәкүк, һандуғас, һабантурғай, болан, аk kайын, kоралай, йондоҙҙар һәм ай, kояш – былар барыһы ла ябай һәм таныш. Ләкин Рәми Ғарипов шиғырҙарында уларҙы өп-өр яңы төҫ менән балkыта алды. Шағир тәбиғәткә сәнғәттең мәңге шиңмәҫ оло сығанағы итеп kарай, тәбиғәт kанундарына ярашлы эшләргә, ул хазинаны яkларға өндәй.

***(«Һабантурғай» (Динара), «Kантүш турғайҙар» (Хафизова), «Көҙ нағышы» (Людмила))***

- 1964 йылда шағир баш kалаға kайта һәм ең һыҙғанып «Совет Башkортостаны» гәзитендә, унан «Башkортостан kыҙы» журналында эшләүен дауам итә. Тыуған яkтары Р.Ғариповkа «Һабантурғай йырҙары», «Осоу» исемле китаптарын яҙырға илһамландыра. Был китаптағы уй – тойғолар йәйғор кеүек күп төрлө һәм сағыу. Р.Ғарипов тормош, хеҙмәт,

йәшәү мәғәнәһе, кешенең тормоштағы урыны хаҡында күп уйлана, фәлсәфәүи шиғырҙар ижад итә.

***(«Бәхет» (Регина ), «Кеше» (Ләлә ), «Күркәмлек» ( Гульназ), «Юҡ, намыҫты данға алмаштырмам» (Алмаз ))***

- 60-сы йылдар аҙағы. 70-се йылдар... Был осорҙа илебеҙҙә бюрократия киң тамыр йәйә. Партия идеологияһы менән йәмғиәт тормошо һәм хатта сәнғәт тә ағыулана. Ошо торғонлоҡ осоронда Р.Ғарипов һәр төрлө насар күренештәргә - алдауға, ике йөҙлөлөккә, яһиллыҡҡа ҡаршы ҡыйыу шиғырҙар яҙа, шуға күрә лә дошмандары, уға яла яғыусылар күп булды.Бигерәк тә түрәләр араһында.

-Тап ошо йылдарҙа милли телдәргә лә мөнәсәбәт кире яҡҡа ҡырҡа үҙгәрә. Шағирҙы туған тел мәсьәләһе борсой, башҡорт теленең яҡты киләсәге өсөн ул етәкселәргә һәм уларҙың эйәрсендәренә, партия исеменән күкрәк ҡағыусы ҡуштандарға ҡаршы көрәшә . Халыҡ, милләт, тел яҙмышы хаҡында уйланыу, һыҙланыу унық ижадында үҙәк йүнәлешкә әйләнә.

***("Тел тыуҙырған халҡым..." (Сирина), "Иң бөйөк һүҙ әле әйтелмәгән..." (Илһөйәр), "Урал йөрәге" ( Ләлә), "Ил тойғоһо" (Сергей ))***

**Йыр. «Салауат» Моратшин Ф.**

- «Туған тел» кеүек тел, ил, халыҡ хаҡындағы шиғырҙары өсөн Р.Ғариповты милләтселектә ғәйепләйҙәр. Был ғәҙелһеҙ ғәйепләү була. Унық әсәһе яғынан өләсәһе рус ҡыҙы – Мария Хисбулла тигән башҡорт егетенә кейәүгә сыға һәм Мөхлисә булып китә. Ҡатыны Надя- украин ҡыҙы. Ул ғүмер буйы Туҡайға баш эйеп, Туфан менән дуҫлашып – хатлашып йәшәй. Хәсән Туфан үҙе былай тип яҙа: « Ҡәҙерле ҡустым Рәми, кәңәш кәрәккәндә, таяныс кәрәккәндә, һис тә икеләмәйенсә миңә таянырға хаҡың барлығын, Ҡазанда һиңә һәр ваҡытта туғанлыҡ ҡулдарын һуҙыусылар барлығын иҫтә тот».

-Шағирҙың иң яратҡан яҙыусылары булып Маяковский, Чехов, Горький, Шолохов кеүек рус әҙиптәре була. Ул төрлө милләт шағирҙарының әҫәрҙәрен тәржемә итә һәм башҡорт поэзияһында иң күренекле тәржемәсе булып таныла. Рудаки, Ғүмәр Хәйәм, Байрон, Гейне, Пушкин, Лермонтов, Блок, Есенин. Твардовский, Ғамзатов һ.б... Был шиғырҙарҙың һүҙҙәрен Рәми Ғарипов башҡорт уҡыусыһына хуш еҫен, шиғри аһәңен юғалтмайынса еткерә алды.

- Эйе, Рәми Ғариповтың шиғри тәржемәләре – унық ижадының интернациональ рухын тағы ла тулыраҡ асыусы ғәжәп бер күренеш ул. Башҡа халыҡтарҙың хазинаһына Рәми һәр саҡ оло ихтирам менән ҡараны, үҙенең һоҡланыуын башҡалар менән бүлешергә теләп, ошо хазиналарҙы башҡортса яңғыратырға ашыҡты.

-

***( "Елкән" ( Гөлназ), «Не жалею, не зову не плачу»(Илһөйәр) Арнауҙар. "Шағир" (Алина ), "Еңел түгел ерҙә шағирҙарға" ( Сергей))***

- Р.Ғарипов тормошта ниндәйерәк ғаилә башлығы, атай, ир булған? Шағирҙың көндәлектәрен, хаттарын, шулай уҡ шиғырҙарын уҡыһаң, нескә күңелле, үҙ ғаиләһен - ҡатынын Надяны, балаларын - Салауатты, Азаматты, Гөлнараны яратҡан тәрән хисле атайҙы күрергә мөмкин.

-Шулай ҙа уларҙың ғаиләһе күге гел ҡояшлы ғына булмағандыр. Р.Ғариповтың ҡыйыу ғәҙеллек күрәшсеһе булыуын үҙ иңендә тойған ҡайһы бер етәкселәр уның иң ауыртҡан еренә баҫалар-шағирҙы бер ергә лә эшкә алдыртмайҙар. Үҙ ғаиләһен яратҡан атай ниҙәр генә кисермәй-аҡсаһыҙлыкты, эшһеҙлекте, ҡатынының аяуһыҙ ҡараштарын... Ауырлыҡтарға бирешмәйенсә, Р.Ғарипов балаларына матур тәрбиә бирә, уларҙы ысын кеше итеп үҫтерергә тырыша, тик ғүмере генә әҙ була.
- Ҡыҙы Гөлнара былай ти: «Беҙ атайға, әсәйгә беҙҙе үҙҙәре миҫалдарында тәрбиәләгәндәре өсөн сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Тап уларҙың беҙҙең атай һәм әсәй булғанына шатбыҙ. Әгәр беҙ , балалары, нимәгәлер өлгәшкәнбеҙ икән, бында атайҙың һәм әсәйҙең роле ҙур.»

***( «Бал-бала» ( Сирина), «Атай алтыны» (Филюс),«Улым Салауатҡа»(Регина), "Әсәлек" ( ХафизоваГ)***

- Замандаштарының иҫтәлектәре буйынса Р.Ғариповты ябай, кешелекле, ярҙамсыл кеше итеп күрәбеҙ. Күптәр уның осрашҡан саҡта йылмайыуын иҫкә төшөрә. Мөсәллиә Хәйруллина былай ти : Рәми — беҙҙең үткәнебеҙ йондоҙо. Ул ябай, тәрән хисле, аҙ һүҙле, илһамлы, һөйкөмлө, йомшаҡ ҡына матур итеп йылмая торған булып күҙ алдыма килә. Йылмайыуынан эске тойғоһо, изге уйҙары нур булып һибелә төҫлө.

- Рәми Ғарипов - ҡабатланмаҫ шағир, үҙенсәлекле талант ине. Хеҙмәт кешеһенә иғтибар, халыҡ яҙмышы тураһында уйланыуҙар, ил-тел хаҡында хәстәрлек, шиғри һүҙгә юғары талап, шиғырҙарҙағы ябайлыҡ һәм күңелдәрҙе арбай торған лирик моң, уй-кисерештәр балҡышы һәм тормоштоң үҙе кеүек тәбиғилек — Рәми Ғарипов яулаған поэтик бейеклектәр хаҡында бына ошолай төрлө яҡлап фекер йөрөтөп була.

**Йыр. «Үтте лә китте йәшлегем». Зәйҙуллин А.**

-Бик әҙ ғүмер йәшәй Р.Ғарипов. 1977 йылдың 20 февралендә, 45 йәше тулғанда, әле ир-аттарҙың ер һелкетеп донъя күтәр мәлендә , шағирҙың йөрәге шартлап туҡтай. Уны мосолман зыяратына ерләйҙәр, ҡәберенә мраморҙан һәйкәл ҡуялар. Әммә шағир үҙе үлһә лә, уның уйҙары, хистәре сағылған шиғырҙары йәшәй. Тимәк, уның күңеле лә, рухы ла беҙҙең менән.

-Туймазы педагогия колледжы студенттары Р.Ғарипов шиғриәтен, шәхесен ҡыҙыҡһынып өйрәнә. Мәҫәлән, 4-се курс студенты Моратшина Ләлә шағир ижады буйынса проект өҫтөндә эшләй. Һеҙҙең иғтибарығыҙға Ләләнең хеҙмәтенән өҙөктө тәҡдим итәбеҙ.

***(Презентация)***

- Халҡыбыҙҙың яратҡан шағиры, халыҡ, ғәҙеллек байраҡсыһы, йөҙөн заманының ҡырыҫ елдәренә ҡаршы ҡуйып, уның хәстәрҙәрен, өмөт-ышаныстарын, ҡайғы-фәжиғәләрен үҙ йөрәгенә һеңдереп, илем, телем,

халkым, тип янып-ярһып йәшәгән Рәмиҙең йөрәге kапыл туктағанға байтаk йылдар үтеп китте.

- Ә шағирҙың халыkka kалдырған бай мираҫы – ялkынлы йырҙарының ауаздары – шиғриәтебеҙ күгендә бөгөн дә күк күкрәгәндәй көслө яңғырай, шағир исеме көндән-көн юғарыраk күтәрелә, үлемһеҙлеккә юл ала...

-Kәҙерле дуҫтар, беҙ Башkортостандың халыk шағиры Р.Ғарипов тормошо һәм ижадына байkау яһаныk. Ысын кеше, гражданин, халkыбыҙҙың тоғро улы беҙҙең йөрәктәрҙә оҙаk һаkланыр тип ышанабыҙ.

-Бөгөнгө кисәлә kатнашыусы 22,25, 32, 42, 52, 33-сө төркөм студенттарына рәхмәт белдерәбеҙ. Иғтибарығыҙ өсөн ҙур рәхмәт. Һау булығыҙ!

*Шиғырҙар*

1. *«Һөтлөгәндәр» (Хафизова ) ,«Әсәм kулдары» (Сирина ), «Бына минең тыуған ер был...»(Динара )*
2. *Kурай. Моратшин Ф.*
3. *«Көтмәгәндә шундай kыҙҙар осрай» (Алмаз ), "Сәскә йыйғанда" (Азат), "Былай үҙең бик матур ҙа түгел" (Филюс ))*
4 *«Һабантурғай» (Динара), «Kантүш турғайҙар» (Хафизова ), «Күҙ нағышы» (Людмила*
5, *«Бәхет» (Регина ), «Кеше» (Ләлә ), «Күркәмлек» ( Гульназ), «Юk, намыҫты данға алмаштырмам» (Алмаз )*
6 .*"Тел тыуҙырған халkым..." (Сирина), "Иң бөйөк һүҙ әле әйтелмәгән..." (Илһөйәр), "Урал йөрәге" ( Ләлә), "Ил тойғоһо" (Сергей )*
Йыр. «Салауат» Моратшин Ф.Зәйҙуллин А.
7. *"Елкән" ( Гульназ ), «Не жалею, не зову не плачу»(Илһөйәр) Арнауҙар. "Шағир" (Алина ), "Еңел түгел ерҙә шағирҙарға" ( Сергей)*
8. *«Бал-бала» ( Сирина), «Атай алтыны» (Филюс),«Улым Салауатkа»(Регина), "Әсәлек" ( Хафизо*
9. Йыр. «Үтте лә китте йәшлегем». Зәйҙуллин А.
10. *Презентация*

**Тыуған илдең kото – САЛАУАТ**
**Башkорт батыры С.Юлаевkа арналған әҙәби-музыкаль кисә**
***Апрель, 2009 йыл***

*Сәхнә асыла*
«Аkkоштар» бейеү ансамбле сығыш яһай. «Һөлгө менән бейеү»

*(Етәксеһе Кашапова Р.)*

**1-се а.б.** Салауат нисә йәшендә?

Йәшел kамсат бүрке башында

Салауаттың йәшен һораһағыҙ

*255* йәшендә!

**2-се а.б.** Көнө Салауаттың – сая алышы,

Төнө юлдаш иткән — шағырҙы,

Хәҙер батыр һәйкәл булып тыңлай

Үлемһеҙлек тигән ҙур йырҙы.

**1-се а.б.** Хәйерле көн, хөрмәтле уҡытусылар, студенттар! Һаумыһығыҙ!

**2-се а.б.** Бөгөн беҙ һеҙҙең менән башҡорт халҡының бөйөк улы С.Юлаевтың тыуыуына *255* йыл тулыу айҡанлы әҙәби музыкаль — композицияға йыйылдыҡ.

**1-се а.б.** Быйыл бөтә Башҡортостан халҡы 1773 – 1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы етәксеһе, шағир — импровизатор С.Юлаевтың тыуған көнөн билдәләй.

**1-се а.б.** С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреты яҙыусы — драматург Н.Асанбаев әйткәнсә, тормошобыҙҙа Салауат беҙгә маяҡ булырға тейеш, һәр аҙымыбыҙҙы унын кимәленән сығып баһалайыҡ, мин Салауаттың ватандашы булыуым менән сикһеҙ ғорурланам.

**2-се а.б.** Эйе, беҙ ғорурланабыҙ. Салауат образы, Салауат һыны беҙҙең йөрәгебеҙҙә, күңелебеҙҙә һаклана. Унын хаҡындағы әҫәрҙәр беҙҙе рухландыра, илһамландыра, моңландыра.

**1-се а.б.** Теләүбаева Э. башҡарыуында башҡорт халыҡ йыры «Салауат» *(Йыр).*

(М.Кәримдең «Салауат» трагедияһынан өҙөк).

Салауат сыға

Сиркәү ҡағалар — ғибәҙәт уҡыйҙар,
Аҙан әйтәләр — ғибәҙәт уҡыйҙар
Бөтә иман юғарынан килә,
Тик түбәнгә төшкәс, ергә һеңмәй,
Күберәк елгә оса, ахрыһы.
Сиркәү ҡағалар: «Сыҙам бул!» - тиҙәр,
Аҙан әйтәләр: «Күндәм бул!» - тиҙәр.

Сыҙам бул... Күндәм бул ... Сыҙам бул...
Күндәм бул...
Шунан башҡа ҡоралың ҡалмағас,
Сыҙамайса нимә ҡылаһың һуң?

(Юлай күренә)

Ултыра, уйға тала. Ҡаршылағы диуар аҡрынлап ишелеп төшә. Юлай күренә.

Юлай. Выждан ғазабында беләм, улым.

Салауат. Атай! Күп ғүмерҙәр күрешмәнек бит... Ғазабымды ҡайҙан беләһең һин?

Юлай. Мин атай бит. Бар уйҙарым һиндә.

Салауат. Шиктәремде тарат, атай!

Юлай. Ҡөҙрәтемдән килмәй, улым.

Салауат. Ни эшләп? Һин бит атай. Һин бит минең атай!

Юлай. Яуза, дауза, сыуаk аk көндәрзә һин бөтәбеззән дә өсТөн, өлкән инең. Kара көндәрзә лә шулай булып kал. Рух ныkлығын беҙ әле лә һинән көтәбеҙ, һиңә таянабыҙ.
Салауат. Әйтсе, атай, һин ышанып килдеңме яуға?
Юлай. Әйе, ышанып килдем. Эшебеззең хаkлығына ышанып килдем.
Салауат. Ә еңеүгә?
Юлай. Еңеүгәме?
Салауат. Әйе, еңеүгә.
Юлай. Еңеүгә мин хата башта уk икеләнеп килдем. Аk батшаның ғәскәре бихисап. Бергә яу йөрөгәндә, үҙ күҙҙәрем менән күп күрҙем мин.
Салауат. Шулай булғас, ниңә баш күтәрҙең?
Юлай. Юлдың хаk икәнен белеп баш күтәрҙем, йәнә һине яkлап яу саптым.
Салауат. «Тайға эйәргән аҙғын ат булдым», - тип үкенмәйһеңме, атай?
Юлай. Үкенмәйем, һинең атайың булыу – ҙур дәрәжә миңә, Салауат.
Салауат. Беҙ бит еңә алманыk.
Юлай. Тәнебеҙ еңелһә лә, йәнебеҙ енде. Сөнки хәтәр ниәтебеҙ хаk ине.
Салауат. Ә түгелгән kандар, сыkkан йәндәр нимә менән аkланыр? Нимә менән?
Юлай. Ә һин донъяны тетрәткән, дошманыңды дер һелкеткән бөйөк шанлы көндәрең тураһында күберәк уйла. Ажғырып килгән ташkындың алдында, өйөрөлөп килгән өйөрмәнең өҫтөндә һин түгел инеңме? Ә максатың? Максатың, улым?..
Салауат. Максатыбыҙ был тиклем үk kорбандарҙың хаkына торорлоkмо һуң, атаҫ?
Юлай. Быныһына беҙ яуап бирә алмайбыҙ.
Салауат. Ә кем яуап бирер?
Юлай. Был тупраkkа беҙҙән һуң килгәндәр.
Салауат. Ул яуапты беҙ һуң нисек белербеҙ?
Юлай. Уны беҙ бер ваkытта ла белмәйсәкбеҙ, улым...
Юлай юk була. Тынлыk.
Салауат Көндәрҙең бөйөктәрен йышыраk уйла, ти, атайым. О ул көндәр! Йәшендәре әле лә йөрәгемде тетрәтә... (Сыға)

**2-се а.б.** Салауатта шағирлыk тойғолары иртә уяна. Рус ғалимы Ф.Нефедовтың раҫлауынса, үҫмер сағында уk тиҙ тәьҫирләнеүсән, дәртле һәм поэтик тәбиғәтле. Салауат һәр нәмәгә kолаk һалыусан була, һәр нәмәгә kарата үҙенең фекерен белдерә, тыуған тәбиғәттең матурлығына һоkлана.
**1-се а.б.** Kыҙғанысkа kаршы, шағирҙың бөтә шиғырҙары ла беҙҙең көндәргә килеп етә алмаған. Килеп еткәндәре лә kулъяҙма рәүешендә түгел, ә халыk аманат итеп быуындан – быуынға еткергән, шулай уk XVIII, XVX , быуат рус ғалимдаре Салауат шиғырҙары тип, Руссаға тәржемә итеп kалдырғандар.

**2-се а.б.** Нисек кенә булмаһын, алтындың ҙурыла, бәләкәйелә ҡимммәттигәндәй, ҡалған шиғырҙары ла беҙҙең өсөн оло Хазина.

**1-се а.б.** Һеҙҙең алдығыҙҙа *II – III* курс студенттары Сәлихҡолова З., Зәйнуллин Р., Рахманова А., Маннанова Л., Солтанғужина А. һәм башланғыс синыф уҡысылары Аҙнаголова А., Салихова А., Хафизов А. Салауат Юлаев шиғырҙарын уҡый.

**2-се а.б.** Донъяла ҡатын – һыҙ матурлығына һоҡланып ижад итмәгән әҙип юҡтыр. Салауат та ҡатын – ҡыҙҙар хаҡында шиғырҙар ижад итә. Шағирзың йөрәген елкендергән, күңелен илһамландврған ҡыҙ ниндәйерәк булды икән?

**1-се а.б.** Бәлки, ошондай булғандыр. Һеҙҙең алдыгыҙҙа Ураҡова Н. башҡарыуында «Башҡорт ҡыҙҙары» бейеүе.

(Ураҡова Н. бейеү башҡарғанда, сәхнә артында Салауат (Зәйнуллин Р.) «Сәстәрендең толом сулпылары»... шиғырыннан өҙөк укый).

**2-се а.б.** «Юлһыҙ ғына ерҙән юлдар ярып...» шиғырын уҡый.

**1-се а.б.** Салауаттың ғаиләһе тураһында анык ҡына материалдар юҡ. Әммә, шиғырҙарынан күренеүенсә, ул үҙенең ғаиләһен бик яратҡан.

**2-се а.б.** Тик Башҡортостанда барған хәл – ваҡиғалар уны ғаиләһенән айырылырға, Тыуған илен һаҡларға китергә мәжбүр иткән.

«Мираҫ» Фольклор ансамбле сығыш яһай.

(Салауат һәм унын артынан халыҡ сәхнәгә сыға)

Салауат*:* Егеттәр, аға-энеләр, апайҙар!
Алыҫ та алыҫ ерҙәрҙә,
Беҙ күрмәгән илдәрҙә
Бүгәсәү тигән бер батыр
Халыҡҡа оран ташлаған
Аңлағыҙ ошо телмәрҙән
Ул миңә хәбәр ебәргән
Бығауылының ҡулынынан
Бығауын йолҡам тигән ул,
Тышаулының аяғынан
Тышауын йолҡам тигән ул!

Егеттәр*:* - Ысынмы, Салауат?
- Ирек өсөн, ер өсөн беҙҙә көрәшкә күтәреләйек!
- Ҡол булып йәшәгәнсе, көрәшеп үлгәнең артыҡ!

Юлай*:* Атҡа менегеҙ, ирҙәр, ағалар*!*
Асылһын әйҙә иҫке яралар
Яраларҙы ирек уңалтыр
Яуыз дошман башын юғалтыр!

Егет*:* Куркмаҫ булһа ирҙәр яранан ,
Уҡ та үтмәҫ беҙҙең аранан.

*1*-се Ҡыҙ: Ағайҙар, олатайҙар, яуыз дошмандар менән алышта еңеп, тыуған яҡка иҫән һау әйләнеп ҡайтығыҙ!

*2*-се Ҡыҙ: Ситтә йөрөгәндә беҙҙең йөҙөбөҙ итеп һаҡлап йөрөтөгөҙ. (Янсыҡ бирә) Беҙ һеҙҙе көтәбеҙ!

(Салауат «Егеткә» шиғырын һөйләй. Егеттәр сығып китәләр. Ҡыҙҙар ҡул болғап, һаубуллашып ҡалалар. Бер ҡыҙ туҡтауһыҙ илай).

*1*-се Ҡыҙ. Гөлнәзирә, илама Инде. Улар Кире ҡайтасаҡтар, бына күрерһең. (Ҡыҙ илауҙан туҡтамай).

*2*-се Ҡыҙ. Әйҙәгеҙ әле Гөлнәзирәнең күңелен күтәрәйек. Зөләйха таҡмаҡтарҙы башла! (Ҡыҙҙар йырлайҙар, бейейҙәр).

*3*-сө Ҡыҙ. Ҡыҙҙар, йыр йырлап ҡына тик йөрөһәк, донъяны кем ҡарайҒ Атайҙарҙың ҡайтыуына мал – тыуар теүәл булһын.

*4*-се Ҡыҙ. Әйе шул. Бейәләр һауырға ваҡыт та еткән. Ҡыҙҙар, киттек! (Сығалар).

(Сәхнәгә карта сығарыла. *1*-се а.б. һәм *2*-се а.б. карта буйынса С.Юлаев етәкселегендәге ғәскәрҙең хәрәкәтен картаға таянып һөйләйҙәр. Яу урындары флажоктар менән билдәләнеп барыла. Алып барыусылар һөйләндә, видеояҙма буйынса Башҡортостан тәбиғәте, «Салауат» филмынан өҙөктәр күрһәтелә. Яй ғына «Илее Ғайса» йыры йәки көйө (ҡурайсы башҡарыуында) яңғырай. Алып барыусылар һүҙен тамамлауға видеомагнитофондан «Ҡаруанһарай» төркөмө башкарыуында «Салауат» йыры тыңлыныла).

**1-се а.б.** *1773* йылдың *18* сентябрендә Яйыҡ буйында Пугачев етәкселегендә восстание башланып киткәндә инде. С.Юлаев үҙ халҡына юлбашсылыҡ итергә шаҡтай өлгөргән егет була. Пугачев восстаниеһын баҫтырыу өсөн Юлай Аҙналинға ғәскәр тупларға ҡушыла. Икенсе көндө үк Юлай үҙенең улы Салауат етәкселегендә йөҙ һыбайлыны Стәрлетамаҡҡа ебәрә. Стәрлетамаҡтан улар *2* мең һыбайлыһы булған кенәз Ураков менән бергәләп генерал – майор В.Ҡар отрядына ҡушылыу өсөн Ырымбурҙан *70* км. алыҫтыҡтағы Бикҡол ауылына баралар. Олеонда Салауат үҙенең отряды менән Пугачев яғына сыға. Ырымбур эргәһендә һуғыштарҙа Пугачев Салауаттың оҫта һугышсы икәнен тиҙ күрә һәм уны полковник дәрәжәһенә күтәрә. Унан һуң Пугачев Салауатты яңынан отряд туплау өсөн Башҡортостанга ҡайтара. Салауаттың саҡырыуына күп халыҡ йыйыла. *1773* йылдың декабрендә *10* мең кеше иҫәпләнә. Салауат уларҙы һуғыш барған ерҙәргә*:* Ырымбурға, Өфөгә, силәбегә ебәреп тора. Үҙе йыйған бер төркөм отряд менән ул Сарапулға китә һәм *1773* йылдың *25* декабрендә уны ала. *1774* йылда биреләә. *12* ғинуарҙа Салауат ғәскәре пушкалар салюты аҫтында Красноуфимскиға инә. *15* ғинуарҙа Салауат Көнгөр крепосына табан йүнәлә. Был һуғышта батыр буған ваҡытта Красноуфимск яңынан ҡулдан ысҡына, Салауат яңынан һөжүм башлау ниәте менән Бөгәлеш ауылы янында яңы ғәскәр туплай башлай һәм *1774* йылдың *27* февралендә Красноуфимскиҙы яңынан яулап ала. Ләкин уны оҙаҡ тота алмай, үҙенең отряды менән Сим заводы территорияһына алып китергә мәжбүр була. Пугачев *1774* йылдың апрелендә Белорет заводы эрсәһендә ғәскәр туплай башлай.

*2* июндә Салауат менән Пугаев Үрге Ҡыйғы ауылы эргәһендә осрашалар, бында Салауатҡа бригадир чины бирелә. *3* июндә Михельсон отряды менән ҡаты һуғыш булла. Салауат яралана, ләкин ул ғәскәр менән етәкселек итеүҙе ташламай, Бөрө крепосыны ла, Пугачев менән Оса крепосын алыуҙа ҡатнаша. Бында ла яралангас, тыуған яҡтарына ҡайтарыла. Ләкин батша ғәскәрҙәре восстаниены аяуһыҙ баҫтыралар, унда

ҡатнашыусыларҙы эҙәрлекләү башлана. *1774* йылдың *25* ноябрендә Катав – Иванов заводы эргәһендәге урмандарҙа ҡасып йөрөгән Салауат тотола.
Салауат сыға. *(*йыр яй ғына дауам итә).

«Атайым да тиһәм, уғым аҙ,
Сабайым да тиһәм, алдым һаҙ.
Ян яҡтарыма ҡараны иһәм
Йән – юлдашҡайҙарым минем аҙ.

Ҡайтыр инем тыуған илемә,
Ҡарҙар яуған минем юлыма.
Ҡарҙар яумаған, ай, юлыма,
Дусар булдым дошман ҡулына.
Һауаларҙа осҡан, ай, ағуна,
Канаттары талып, ҡағына.
Мин киткәнгә илап ҡайғырмағыҙ,
Батыр ирҙәр тыуыр тағы ла*!*»

*(*Йыр көсәйә. Салауат сыға)

**1-се а.б.** Салауат батыр алмас ҡылысының
Йөрөтөр булған һәр саҡ билендә,
Салауат батыр һәләк булһа ла,
Даны йәшәй Тыуған илендә*!*

**2-се а.б.** Геройҙар үлмәй, уларҙың образдары легенда булып, халыҡ үҙе үлемһеҙ булған шикелле үк, үлемһеҙгә әйләнә.
(Р.Ураҡсина һүҙҙәренә яҙылған «Салауат» йырын ҡыҙҙар коллективы башҡара. Аҙаҡҡы куплетты йырлағанда, бөтә ҡатнашыусылар ҙа сығалар).
**1-се а.б.** Хөрмәтле тамашасылар, Салауат Юлаевтың тыуыуына 250 йыл тулыуына бағышланған әҙәби – музыкаль кисәбеҙ тамам.
**2-се а.б.** Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт. Киләһе осрашҡанға тиклем һау булығыҙ!

### *Башҡортостан Республикаһы көнөнә бағышланған әҙәби музыкаль кисә.*

***Октябрь, 2009 йыл***

*(Ҡурай көйө яңғырай)*

Сәхнәгә шиғыр һөйләүселәр сыға.

**Башҡорт телендә:** Бер һүҙ беләм.
Аҙашҡанда юлдарымды
Яҡтыртамын шул һүҙ менән,
Шул һүҙ менән, ауырҙы ла еңел күреп,
Мин тауҙарға елеп менәм.

**Татар телендә:** Бер һүҙ беләм, Олатайҙар васыяты
Ошо һүҙгә һыйған һымаҡ.
Быуаттарҙың яҡты нурын, яҡшы йырын.
Ул үҙенә йыйған һынап.

**Башк.тел:** Нисәмә ҡат асылһа ла,

Һатылмаған һис бер көскә.

Яу ҡупҡанда, сафтар буйлап, юлбашсылай,

Остан осҡа

Был һүҙ осҡан -

**Бөтәһе лә бергә:** Башҡортостан!

**Русса шиғыр:**

Башкортостан – чудесная земля!
Кругом сады – зеленые поля!
На зорьке тихо солнце ясное встает
Как белый лебедь, Агидель плывёт.

*(Алып барыусылар сыға)*

**1 а.б.:** Хәйерле көн, һаумыһығыҙ хөрмәтле дуҫтар!

**2 а.б.:** Добрый день, уважаемые учителя, дорогие студенты! Вот уже который год 11 октября в Башкортостане отмечается праздник День Республики.

**1 а.б.:** Беҙ ҙә һеҙҙең менән Башҡортостан республикаһы көнө алдынан осрашабыҙ, тыуған еребеҙҙән илһам алып йәшәүебеҙгә ҡыуанабыҙ.

Бөтәгеҙҙе лә ошо байрам менән ихлас күңелдән ҡайнар ҡотлайбыҙ! Илебеҙ имен, күгебеҙ тыныс, күңелдәр көр булһын. Байрамыбыҙ мөбәрәк үтһен!

**2 а.б.:** Поздравляем всех праздником! Слово для поздравления предоставляется директору Туймазинского педагогического колледжа Казакову А.М.

*(Ҡотлау һүҙе – директорға)*

Спасибо, Александр Михайлович.

**1 а.б.:** Урал ғына буйы бигерәк йәмле.

Аҡ тирмәләр ҡороп йәйләргә.

Ҡаяларға баҫып ҡурай юндым,

Уралымды маҡтап көйләргә.

Күңелдәге байрам хистәрен халҡыбыҙҙың яратҡан ҡурай көйҙәре өҫтәп ебәрер!

Сәхнәлә – ҡурай ансамбле. Етәксеһе - Әбсәләмов Рәмзин Рәфҡәт улы.

*(Ҡурай ансамбле)*

**2 а.б.:** Тыуған илгә мөхәббәт атай-әсәйгә, тыуған ауылға һөйөү, ихтирам хисенән башлана. Ә беҙҙең педколледжда төрлө ауыл һәм районДарҙан студенттар йыйылған. Шуға күрә бөтәбеҙгә лә билдәле: тыуған яҡҡа тартылыу тойғоһо бер ҡасан һүрелмәй. Сәхнәгә Миннегалина Рәмзиәне саҡырабыҙ. Ул «Тыуған яҡ» йырын башҡара.

(Миңнеғалина Р.)

**1 а.б.:** Башҡортостан Республикаһында 100-гә яҡын милләт халҡы йәшәй. Презедентыбыҙ М.Рәхимов ошо халыҡтар дуҫлығын матур гөлләмә менән сағыштыра: «һәр милләт - унның хуш еҫле сәскәһе»- ти ул.

**2 а.б.:** Ысынлап та, һәр милләт үҙенсәлекле Башҡорттар, мәҫәлән, ҡурай, ҡумыҙ кеүек музыка ҡоралдары менән дан тота. Ә урыҫ халҡы

борон-борондан балалайка, гармун, флейта кеүек ҡоралдарҙа уйнап моңланған.

Сәхнәгә Әхмәҙуллина Риманы саҡырабыҙ. Ул домрала вальс көйҙәрен башҡара. Фортепьянола – музыка уҡытыусыһы Исламова Асия Тәлгәт ҡыҙы.

*( Ахмадуллина Римма)*

**1 а.б.:** Тормош матур, тормош гөрләй.
Был бит беҙҙең йәшлек йәшнәй
Йөрәктәрҙе елкендереп
Бейеү сәхнәгә әйҙәй!
Гәбсәлихова Әлиә татар халыҡ бейеүен башҡара. Ҡаршылайыҡ!

*(Бейеү)*

**2 а.б.:** Йәшлек... ниндәй матур мәл. Йырлағы, бейеге килгән саҡ. Хистәргә хыялдарға бай осор. Саф мөхәббәт тойғолары ла ошо йәшлек осоронда тыуа бит. Сәхнәгә Абдуллина Динараны саҡырабыҙ. Уның йыры һеҙҙең өсөн, күңеле һәм йөрәге менән мәңге йәш ҡалыусы тамашасыларыбыҙ өсөн!

*(Абдуллина Д.)*

**1 а.б.:** Башҡортостандың тупрағы бәрәкәтле лә, мәрхәмәтле лә. Изге тупраҡтан яралған халыҡтың рухы ла ныҡ, аҡылы ла камил, зиһене лә үткер. Шуға күрә республикабыҙ талантлы кешеләргә бай. Арҙаҡлы шәхестәребеҙ Башҡортостаныбыҙҙың данын, абруйын күтәрә. Ә Халҡыбыҙ уларҙы ихтирам итә. Мәҫәлән, ошо көндәрҙә Республика М.Кәримде ололап, тыуған көнөн билдәләргә әҙерләнә

**2 а.б.:** М. Кәрим... Унын исемен ишетеү менән әҫәрҙәре әллә күпме илдәрҙә яратып уҡылған оло аҡыл эйәһе, күҙ алдыбыҙға килеп баҫа. Унын әҫәрҙәре мәңгелек. Беҙҙең студенттар ҙа яратып уҡый шиғырҙарын. Улар һеҙгә Шағирҙың мөхәббәткә арналған шиғырҙарын уҡый.

*(Шиғырҙар. Йыр.)*

**1 а.б.:** Һеҙҙең алдығыҙҙа Әгелтдинова Алһыу, Моратшина Ләлә, Хафизова Гүзәл шиғырҙар уҡыны.
Әюпова Гүзәл йыр башҡарҙы.

Сәстәренден толом сулпылары
Сылтырауы салына үҙемә.
Күл буйында үҫкән ҡуға төҫлә.
Тирбәлгәндәй күренә күҙемә.

Был һүҙҙәрҙе 2 быуат элек С. Юлаев бер һылыуға бағышлаған. Бөгөн дә бар ундай ҡыҙҙар! Сәхнәлә Фәйҙуллина Ирина «Башҡорт ҡыҙҙары» бейеүен башҡара.

*(Бейеү)*

**1 а.б.:** Һәр кешенең яратҡан байрамы була. Яңырак ҡына Республикабыҙҙа өлкәндәр көнө, уҡытыусылар көнө үткәрелде, кемдер тыуған көнөн түҙемһеҙләнеп көтә. Илдә именлек булһа байрамдар уҙғарылыр. Миннигалина Алһыу башҡарыуында «Тыуған көн» йыры.

*(Миннигалина А)*

**2 а.б.:** Аяз, әйт әле, нимә ул бәхет?

**1 а.б.:** Минеңсә, бәхет ул – Тыуған илендә, ерендә йәшәү. Уkыу, эшләү. Халыkkа хеҙмәт итеү.

Бәхет ул сәхнәлә һинең, һеҙҙең менән һөйләшеү.

**2 а.б.:** Бөтәһе лә дөрөҫ. Аkыл эйәләре лә, бәхет тураһында күп әйткән. Әммә донъялағы һәр кеше бәхетте үҙенсә аңлай. Бына, мәҫәлән, Ниғмәтуллина Гөлләриә һеҙгә шул хаkта «Иң ҙур бәхет» йырын бүләк итә.

(*Ниғмәтуллина Гөлләриә йырлай)*

**1 а.б.:** Башkортостан – минең республикам
Ниндәй иркен һәм бай еребеҙ!

**2 а.б.:** Беҙ атларға тейеш ошо ерҙән
Хужа булып уға үҙебеҙ.

**1 а.б.:** Хөрмәтле тамашасылар, байрам концертыбыҙ тамамланыуға етә. Барығыҙға ла kоростай ныkлы һаулыk, Ағиҙел йылғаһындай оҙон ғүмер, муйыл сәскәһендәй ап-аk бәхет теләйбеҙ.

## *Башkорт яҙыусыһы Т.Ғарипова kатнашлығында Туймазы kалаһында уҙғарылған китап уkыусылар конференцияһы сценарийы*

***Май, 2010 йыл***

**1 а.б.** Кешелек донъяһы башланғандан бирле донъяға күпме сәсәндәр, аkындар, шағирҙар, һүҙ оҫталары тыуған. Милләттең аkылын, рухи бейеклеген билдәләгән улар. Халыkтың ғорурлығы булып Милли мәҙәниәттең символына әүерелгән, улар халыk күтәргән байраkтың юғарылығын билдәләгән. Рустарҙа Пушкин, инглиздәрҙә Шекспир, немецтәрҙә Гете, итальяндарҙа Данте, татарҙарҙа Тукай – ана шундай ижадсылар. Илебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе донъя күләменә күтәргән оло таланттар башkорт улдары һәм kыҙҙары араһында ла булған, бар һәм буласаk.

Ана шундайҙарҙың береһе – Таңсулпан Ғарипова. Ул, беҙҙең баш особоҙҙа ғына түгел, бәлки, бөтә әҙәбиәт күгендә балkыш, яkты яkтылыk – йондоҙ булып балkып үтте.

Ә хәҙер Т. Ғарипованың тормош һәм ижад юлына байkау яһайыk. (һүҙ китапханасыға бирелә).

**2 а.б.** Таңсулпан Ғарипова әҙәбиәткә үҙенең тәрән мәғәнәле, фәһемле әҫәрҙәре менән килеп Инде. Кеше психологияһын, эске донъяһын, рухиәтен юғары кимәлдә күрә, аңлай белеүсе әҙибә ул. Кеше яҙмышын үҙ яҙмышы кеүек kабул итә. Кеше ғәмен үҙенекеләй күрә һәм тәрән кисерә белә. Күркәм һүҙ – изге һүҙ ул. Изгелек төшөнсәһендә иң беренсе сиратта яҙыусының кешелек сифаттары ята. . Педагогия фәндәре докторы Рафаэль Аҙнағолов Т. Ғариповаға арналған «Яҙыусы kаһарманлығы» тигән мәkәләһендә бына нимә ти: «Таңсулпандың иманы-инаныу, инаныуы иман. Анна шул диалектик бөтөнлөк унын ижадын һәм яҙыусылыk шәхесен күтәрә».

«Иман барҙа – әхлаk бар», - тигән әйтем йәшәй халыk телендә. Ә нимә һуң ул иман? (яуаптар: намыҫ, ышаныу, kабул итеү һ.б. – әҙәп, әхләk, дин, тормошkа, кешеләргә сифаттарҙан сығып kарау)

**1 а.б.** Иманhыҙҙар... Йыш kына «Заманалар бигерәк иманhыҙ...», - тиҙәр, әсенеп. Иман юғала, тибеҙ. Борон бер аkыл эйәhе «Донъяла иң kурkkаның нимә?» тигән hорауға: «Иманымдан айырылмаhам ине,» - тигән. Иман тигән төшөнсә кисә-бөгөн барлыkkа килмәгән. Уны беҙҙең быуынға ата-бабаларыбыҙ үҙ ғүмер hабаkтарынан ынйылай сүпләп, аманат итеп kалдырған.

«Әҙәплелек, оятлылыk имандандыр,»- ти изге Ҡоръән. Заманалар үҙгәрә, әммә кешелеккә, йәшәйешкә хас әхлаkи-этик kиммәттәр генә үҙгәрмәне. Белеүебеҙсә, яҙыусы Кеше бер ваkытта ла хуш күңелле, барыhынан да kәнәғәт hәм риза булып йәшәй алмай, сөнки ул йәмғиәттең күҙе hәм kолағы, намыҫы.

Ә яҙыусы Т. Ғарипова әҙәбиәткә мәктәп аша, уkытыусы булып килеп Инде. Үзенең әҫәрҙәрендә әҙибә өгөт-нәсихәт hатмай өлгө бирә, күп hөйләмәй, ә тәрбиәләй.

Художестволы hүҙ сәнғәтен үҫтереүҙә Т. Ғарипова өс йүнәлештә эшләй. I – ул оҫта хикәйәсе, II – драматург, III – романсы. Яҙыусы үҙенең тәүге хикәйәләр йыйынтығы менән үк («Ялан сейәhе») башkорт прозаhына ҙур ижад kомары менән янған, hүрәтләү оҫталығына эйә булған, өмөтлө, талантлы, бик тә үҙенсәлекле әҙибә килеүен иҫбатлай.

**2 а.б.** Александр Грин «Донъяла Кеше иғтибарын hәр саkта ла йәлеп итеп торорлоk өс мәңгелек тема бар тигән: тормош-көнкүреш, мөхәббәт hәм үлем ». Т.Ғарипованың «Бөйрәкәй» романы быға асыk миҫал булып тора.

Был хәkикәтте тағвн яkшыраk аңлар өсөн, hөйләшеүебеҙгә ойоткo hалыр өсөн, әҫәр йөкмәткеhен иҫкә төшөрәйек. *hүҙ Дәүләтшина Люциә Бостан kыҙына бирелә.*

**2 а.б**. Был романға тоташ бер быуат hыйған. Романда hүрәтләнгән ваkиғалар Тирәкле ауылы халkының колхозлашыу, шәхус культы, репрессия, Бөйөк Ватан hуғышы йылдарындағы ауыр, михнәтле тормош юлын үҙ эсенә ала. Советтар Союзының тарkалыуы, шул осорҙағы болғанышлы ваkиғалар, демократияhәм капитализм күренештәренең кешеләр тормошона йоғонтоhо беҙҙең күҙ алдыбыҙҙан үтә. ошо хаkта «өлөшөбөҙгә төшкән «көмөшөбөҙ» йәки XX быуат тарихының геройҙар яҙмышында сағылыша» исемле доклады менән *Хөсәйенова Нәфисә Дамир kыҙы сығыш яhай.*

**1 а.б.** Яҙыусы ил йолалары, ил хистәре, ил мәшәkәте менән йәшәгән, тормоштоң ниндәй генә kатмарлы саkтарында лабаш әймәгән, өмөтөн өҙмәгән, түҙемле, балаларын kурсалап йәшәгән kатын-kыҙ образдарын ҙур оҫталыk, яkы буяуҙар аша үҙенсәлекле итеп асып бирә. hүҙ Сәләхова Ләлә Зиннур kыҙына бирелә.

**2 а.б.** Башkорт kатын-kыҙҙарының береhе ул Мәҙинә. h*үҙ Ғәниева Зөлфиә Минулла kыҙына бирелә.*

**1 а.б.**Ниндәй генә яҙмышkа дусар булhа ла, әхлаkи йөҙөн, айыk аkылын, күңел сафлығын haklап kала белгән ир-егеттәр образы айырым иғтибарға лайыk. Ә Ихсанбай kылыktарының, барлыk гөнаhтарының нигеҙе kайҙан? Уның хаталарына кем ғәйепле? Ошо hорауҙарға яуап биреү өсөн *hүҙҙе Светлана Мирзаянова Тәлғәт kыҙына бирәйек.*

«Яҙмыш hынауында ир-егеттәр: кемдер hына, кемдер hынатмай».

**2 а.б.** Һәр бер әҡәрҙең кәркәмлеге, образлылығы, яҙыусының телмәр поэтикаһынан тора. Халыҡсан телмәр художестволы әҫәрҙең йәшәүғүмере булып тора. «Бөйрәкәй» - роман халыҡсан телмәр поэтикаһы менән ижад ителгән. Әҫәрҙә халыҡ йырҙары- мәҡәл, әйтемдәр халыҡ ижадының башҡа төрҙәре менән үрелеп бара.

«Бөйрәкәй романының моң-биҙәктәре» исемле сығышы менән *Туймазы педагогия колледжы студенты Камалетдинова Гөлназ сығыш яһай.*

**1а.б.** Таңсулпан Ғарипованың «Бөйрәкәй» пенталогияһы башҡорт әҙәбиәтендә яңылыҡ, өр-яңы бейеклек булды. 2005 йылда Ә. Вәлиди исемендәге Республика Милли китапханаһы үткәргән конкурс-тикшеренеүҙә был роман иң популяр әҫәр тип баһалана.

«Әҙәбиәтебеҙ киңлегендәге яңы бейеклек» *ТПК студенты Моратшина Ләлә һүҙ ала.*

**2 а.б.** Беҙ роман геройҙарына, романдың үҙенә шәхси балабыҙҙы бирергә ынтылдыҡ. Әлбиттә, романды күпме Кеше уҡый – шунынҫа фекер йәшәй. Был аксиома.

Шулай ҙа беҙҙе, тағын да бер фекер ҡыҙыҡһындыра. Ул, әлбиттә, яҙыусының фекере. Һәм бөгөн ошо һөйләшеүебеҙҙә «Бөйрәкәй» романының авторы – Таңсулпан Ғарипованың ҡатнашыуынан файҙаланып, беҙ уға һүҙ бирәбеҙ.

Таңсулпан апай, беҙҙе бөтә нәмә ҡыҙыҡһындыра: романдың яҙылыу тарихынан башлап бөгөнгө көнгә тиклем һеҙҙең менән, беҙҙең менән йәшәүе, образдарҙың тыуыуы, улар аша әйтергә теләгән фекерегеҙ, романда ҡуйған проблемағыҙ һәм уны беҙҙең аңлауыбыҙ һ.б., һ.б.

*Шулай итеп һүҙҙе һеҙгә бирәбеҙ. Ҡаршылайыҡ, Таңсулпан Ғарипова!*

**2 а.б.** Әҫәрҙең бөгөнгө көн уҡыусыларын дөрөҫ тәрбиәләүҙә, тормошҡа дөрөҫ ҡараш формалаштырыуҙа әһәмиәте бик ҙур. «Яҡшынан үрнәк ал, ямандан ғибрәт ал», - тигән әйтем бар башҡорт хаҡында. Йәш быуынды тәрбиәләү, рухи байлығын байытыу, күңел офоҡтарын киңәйтеү йүнәлешендә әҙәби образдар ныҡлы таяныс булып тора. Романды уҡып, фәһем алабыҙ, тормошта булҡан тиҫкәре күренештәр менән көрәшергә өйрәнәбеҙ. Роман – эпопея бөгөн уҡыусыны еңел булмаған был тормошта йәшәү мәғәнәһенә өйрәтә.

**1 а.б.** Бөгөнгө әҙәби кисәгә килеүселәр араһында күпселеге – башҡорт әҙәбиәте уҡытыусылары һәм китапханасылар. Мәктәп уҡытыусыһы ғүмер буйы яҙыусы ижадын балаларға, халыҡҡа еткерә, саҡыу, күркәм ижад өлгөһөндә балаларға белем һәм тәрбиә бирә. Тимәк, уҡытыусы - яҙыусы рухын, күңелен үҫтереүсе булып ҡала һәм ҡаласаҡ. Бөгөнгө заман шарттарында (бик актуаль булып ҡала килгән) нәфис әҙәбиәткә ҡыҙыҡһыныу, һөйөү тәрбиәләү – беҙҙең төп бурысыбыҙ тип һанайым. Йомғаҡлап әйткәндә, йәшәү мәғәнәһен тойоу, йәшәү тәмен татыу өсөн Әҙәбиәтте юлдаш итәйек. Рухи таяныстар, күңел бөтөнлөгө, яҡтылыҡ, изгелек эҙләү юлында бөгөн Таңсулпан Ғарипова. Уҡа был юлда уңыштар, оҙон ғүмер, ныҡлы һаулыҡ теләйек.

*Туймазы педагогия колледжында*
*Туған телдәр төркөмдәренең ижади осрашыуы*
***Октябрь, 2010 йыл***

1 а.б. Һаумыһығыҙ, хөрмәтле студенттар, курсташтар, һәм дә ҡәҙерле уҡытыусылар!
2 а.б. Хәйерле көн, дуҫтар! Бына бөгөн, көҙ айының матур бер көнөндә, әҙәбиәткә, телгә, ижадҡа битараф булмаған студенттар «Төркөмдәрҙең ижади осрашыуы» кисәһенә йыйылды.
1 а.б. Күңелдәрҙе һәм йөрәктәрҙе илһам, рух, дәрт менән байытып, моңһоҙҙарҙы моңландырып, уҡыуҙарҙан арынып әҙ генә ял итеп алайыҡ, дуҫтар.
2 а.б. Бөгөн осрашыуҙа ҡатнашыусылар – Туған тел бүлеге студенттары – 32-се, 42-се, 52-се төркөмдәр һәм I, II курстар. Дөйөм алғанда, буласаҡ тел уҡытыусылары. Дәртле, көләс, йыр-моңға әүәҫ, хис-тойғоларға бай студентттар улар!

*(презентация)*

Һәм төркөмдәрҙең эштәрен баһалаусы хөрмәтле жюри ағзалары менән таныштырып үтәбеҙ.
2 а.б. Студент тормошо... Иртәнән кискә тиклем уҡыуҙар, лекциялар, семинарҙар... Уҡырға әйҙәүсе уҡытыусылар, уларҙың ягымлы, ә ҡайһы саҡ уҫал ҡараштары... Йөрәккә май булып яғылған бишле һәм дүртле билдәләре, ә ҡайһы саҡ иҫкә төшкән һайын һиҫкәндергән өслөләр һәм хатта «2»ләр...
1 а.б. Көндәр буйы һөйләшеп туймаҫ дуҫтар, кистәр буйы эс серҙәрен бүлешер әхирәттәр. Шаулы-гөрлө ятаҡ тормошо... Ҡыҫҡаһы, күңелле һәм ғәмһеҙ саҡтар!
2 а.б. Ә беҙҙең студенттар үҙҙәренең тормошон нисек һүрәтләйҙәр икән?
1 а.б. Ошо һорауға яуап итеп беҙ төркөмдәрҙең үҙҙәренә һүҙ бирәбеҙ. Бөгөнгө осрашыуҙа 32-се, 42-се, 52-се төркөмдәр актив ҡатнашалар, ә I, II курстар үҙҙәрен киләһе йылда күрһәтерҙәр. Ш.И., төркөмдәр менән танышабыҙ. Һүҙ III курстарға.

*(III курс презентацияһы)*

2 а.б. Афарин, 32-се төркөм. Һеҙ үҙегеҙҙе шулай һүрәтләнегеҙ, ә бына беҙ, 3 йыл буйына күҙәтеп йөрөп, һеҙгә ошондай таҡмаҡ сығарҙыҡ:

32-лә контроль эш
Барыһы шып-шым булған.
Яуап бирәләр яҡшы,
Кеҫә шпаргалкаға тулған.
Гөлнара Яхъя ҡыҙы
Өйгә эште һораһа,
Парта артына боҫҡан
Ҡыҙҙарҙа бәхәс ҡыҙа.
Һин дә студент,
Мин дә студент,
Кем һуң таҡтаға сыға?

Ә хәҙер 42-се төркөм, һүҙ һеҙгә бирелә.

*(IV курс презентацияһы)*

1 а.б. Рәхмәт, 42-ләр. Һеҙгә лә таҡмаҡ сығарҙыҡ:

Эй, ҡыҙҙары ла дәртле
Күлдәктәре сәскәле
Дәрестән ҡасып барғандар
42-ләр түгелме?
Туй артынан туй үтә
Уҡыуҙар дауам итә.
Ҡыҙҙар диплом алғансы
Бәпәйҙәр атлап китә.

Аҙаҡҡы курста уҡыусы 52-се төркөм менән танышайыҡ! Һүҙ һеҙгә, ҡыҙҙар!

*(V курс презентацияһы)*

2 а.б. Рәхмәт, *V курс. Һеҙгә бағышлап яҙылған таҡмаҡты ла уҡып еткерәһе килә:*

*Дәрес башланып китә,*
*Бәлеш еҫтәре килә.*
*52-селәр сәй эскәнсе,*
*Дәрес үтеп тә китә.*
*52-се төркөмдөң*
*ҡыҙҙары шундай уңған*
*Шәмбе көнгә дәрес ҡалмай,*
*Уҡып бөтәләр алдан.*

1 а.б. Бөтә төркөмдәр ҙә үҙҙәре хаҡында һәйбәт презентациялар әҙерләгән. Тағы бер тапҡыр ҡул сабып рәхмәтебеҙҙе белдерәйек!

2 а.б. Бөгөнгө кисә «Төркөмдәрҙең ижади осрашыуы» тип атала. «Осрашыу» һүҙе аңлашыла, ә ни өсөн ижади тип атала һуң? Быны ғилләһе нимәлә?

1 а.б. Бөгөн беҙ бүлектең һәләтле, талантлы, әүҙем студенттары менән танышабыҙ. Алда ҡараған презентациялар ҙа студенттарҙың ижади емеше. Һәр төркөм уйланған, эҙләнгән һәм ҡыҙыҡлы итеп эшләгән.

2 а.б. Концерттарҙа ла беҙҙең ҡыҙҙар һәйбәт бейейҙәр, йырлайҙар. Ғөмүмән, уҡытыусы ул артист та булырға тейеш.

1 а.б. Бына артабанғы номерҙарыбыҙ студенттарҙың ана шул актерлыҡ һәләтен күрһәтеүгә бәйле. Төркөмдәргә үҙҙәре һайлаған әҫәрҙе сәхнәләштерергә тигән эш бирелде.

2 а.б. III курс балалар яҙыусыһы Фәрҙәнә Аҡбулатованың «Атай икмәге» әҫәрен һайлаған. Автор Бөйөк Ватан һуғышы йылдарын онотмаҫҡа саҡыра. Был көндәрҙә бөтәһенә лә – илде һаҡлаусы һалдаттарға ла, тылда эшләүсе ҡатындарға ла, хатта кескәй генә балаларға ла ауыр була...

*(сценка 32 төркөм)*

1 а.б. Рәхмәт, 32-се төркөм. Эйе, Бөйөк Ватан һуғышы хаҡындағы әҫәрҙәр үлемһеҙ.

2 а.б. Ошо һуғышта күп яҙыусылар ҙа ҡатнаша. Улар араһында Ибраһим Абдуллин да бар. Яңыраҡ уның тыуыуына 90 йыл тулды. Ә 42-се төркөм ошо яҙыусы-драматургтың «Их, Өфө ҡыҙҙары!» әҫәренән өҙөктө сәхнәләштерә.

*(сценка 42 төркөм)*

1 а.б. Рәхмәт, 42-се төркөм! 52-се төркөм беҙҙе яҙыусы М.Кәримдең бала саҡ иленә саҡыра. Улар «Өс таған» әҫәренән өҙөктө һеҙгә тәҡдим итә.

*(сценка 52 төркөм)*

2 а.б. Рәхмәт, 52-селәр! Төркөмдәр бик уйландарғыс, ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс сценкалар әҙерләгән! Тағын да бер мәртәбә уларға рәхмәтебеҙҙе белдерәйек. Был алҡыштар һеҙҙең өсөн!

1 а.б. Азат, әйт әле, һин ижади кешеме?

2 а.б. Ауыр һорау. Яуап бирмәһәм яраймы? Мине маҡтана тип уйлап ҡуйырһың тағын...

1 а.б. Аңлашылды, улай булғас. Был һорауҙы беҙ студенттарға ла бирҙек. Һәм ҡыҙыҡлы һөҙөмтәләргә килдек: 32-се төркөм, бөтәһе тиерлек, «Мин үҙ һәләтемде кешеләргә күрһәтергә оялам» - тип яуап биргәндәр, ә 42-селәр араһында, «Эйе, мин ижади» тигән яуаптар йышыраҡ осрай. 52-ләрҙең инде күбеһе «Мин ижади кеше» тип яҙғандар. Шуныһы ғәжәп, бөтәһе тиерлек ижади кеше ул – һүрәт төшөрөп, әҫәрҙәр яҙған, йыр-бейеүгә оҫта кеше генә һанала тип уйлай. Ысынлап та, улар ижади кеше, әммә донъялағы бөтәһе лә ижадсы була ала, сөнки ижади кеше ул – иң тәүҙә үҙенең тормошонан картина яһаусы рәссам, әҫәр тыуҙырыусы шағир булырға тейеш.

Тимәк, күптәр ижад тураһында уйлана тәбиғәт биргән һәләттәрен асырға ынтыла.

2 а.б. Ә тел уҡытыусылары ысынлап та, төрлө яҡлап ижади шәхес булырға тейеш. Дәрестә ойоштороусы ла, сәхнәлә һүҙ оҫтаһы лә, артист та, кәрәк икән шиғыр яҙыусы ла!

1 а.б. Артабан төркөмдәрҙең ана шул шиғыр яҙыу оҫталығын һынап ҡарайыҡ. Сәхнәгә һәр төркөмдән 2 студент саҡырыла.

*(Студенттар сәхнәгә менә)*

Ошо конверттарҙа шиғырҙең башы бирелә, ә һеҙгә дауам итергә кәрәк буласаҡ.

*(конверттар тапшырыла)*

2 а.б. Төркөмдәр был эште башҡарғансы, беҙ шиғриәт өлкәһендә беренсе аҙымдар яһаусы студенттарыбыҙға һүҙ бирәйек.

*(шиғыр тыңлау)*

Рәхмәт. Үҙҙәренең шиғырҙарын уҡып үттеләр Атангулова Г., Хәйруллина Г., Муллакаева Румия

1 а.б. Төркөмдәргә һүҙ бирәйек. Һеҙ әҙерме? Афариндар, оҫта итеп шиғыр яҙа беләһегеҙ икән. Рәхмәт, урындарығыҙға ултырығыҙ.

2 а.б. Ысынлап та, ижад ҡыҙыҡлы ла, ҡатмарлы ла, илһамлы ла хеҙмәт. Һәләттәрҙе асыр өсөн әллә күпме саралар, юлдар бар.

1 а.б. Бына яңыраҡ ҡына филология фәндәре презентацияһы көндәрендә башҡорт теле буйынса олимпиада ойошторолдо. Унда ла һәләтле йәштәр ҡатнашты.

2 а.б. Шул олимпиаданы йомғаҡларға башҡорт теле уҡытыусыһы Кәримова Гөлнара Яхъя ҡыҙын саҡырабыҙ.

1 а.б. Рәхмәт, Гөлнара Яхъя ҡыҙы. Олимпиада I курстар араһында ла талантлы студенттарыбыҙҙың барлығын асты. Сәхнәгә «Тасуири уҡыу»

номинацияһында еңеүсе Рәхмәтуллина Алинаны саkырабыҙ. Ул олимпиадала kатнашыусыларҙы тәбриклəп шиғыр уkый.
2 а.б. Беҙҙең осрашыу аҙағына етеп килә. Төркөмдәр ижади кисәгә һәйбәт итеп әҙерләнгәндәр. Һәм кисәлә хөрмәтле kунаkтарыбыҙ – уkытыусылар һәм V курста студенттарҙың эштәрен баһалап ултырҙылар. Улар йомғаk яһағансы беҙ сәхнәгә Лутфуллина Ильгинаны саkырабыҙ.

*(Л.Ильгина – йыр)*

1 а.б. Хөрмәтле уkытыусылар - жюри ағзалары. Беҙҙең төркөмдәрҙең эшен нисек баһаланығыҙ? Һүҙ һеҙгә.
2 а.б. Рәхмәт! Төркөмдәрҙе еңеүҙәре менән kотлайбыҙ! Сараға етди әҙерлегегеҙ өсөн рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ! Һәм һәр ваkыттағыса, дуҫлыk енде! Төркөмдәр, студенттар араһында гелән дуҫлыk булһын. Ошо хакта Миннигалина Алһыу йыр башkара.
1 а.б. Ҡәҙерле дуҫтар, студенттар! Хөрмәтле уkытыусылар! Ошоноң менән беҙҙең осрашыу тамамлана. Илһам шишмәгеҙ һайыkмаһын, йыр-моң һөйөүгеҙ һүрелмәһен. Дәртле, моңло халыk булып йәшәйек! Иғтибарығыҙ өсөн ҙур рәхмәт!
2 а.б. Киләһе осрашkанға тиклем

Һау булығыҙ! (бергә)

***“Туймазы ере-эшһөйәрҙәр һәм илһөйәрҙәр иле” kала фәнни-практик конференцияһы***

***Май, 2010 йыл***

*1. Музыка. Презентация. 2. Шиғырҙар. 3.Ҡурай. (kурай ансамбле)*

1. А.Б. һаумыһығыҙ, kәҙерле дуҫтар, kунаkтар!

2. А.Б. Хәйерле көн, хөрмәтле уkытыусылар, студенттар!

1. А.Б.Беҙ һеҙҙе Туймазы педагогия колледжында “Туймазы ере-эшһөйәрҙәр һәм илһөйәрҙәр иле” kала фәнни-практик конференцияһында күреүебеҙгә шатбыҙ!

2. А.Б. Билдәле булыуынса, беҙҙең район һәм kалала Башkорт мәҙәниәте көндәре бара. Ошо йәһәттән беҙ махсус белем биреү учреждение студенттарын, мәктәп уkыусыларын, уkытыусыларҙы һәм kалабыҙҙың хөрмәтле кешеләрен kорға йыйҙыk.

1. А.Б. Һөйләшеүебеҙ фәһемле һәм kыҙыkлы булыр, күңелдәрҙә яkты хәтирәләр kалдырыр тигән өмөттәбеҙ.

2. А.Б. Һеҙҙең өсөн колледжыбы66ы8 «А77оштар» бейе1 ансамбле сығыш я3ай. Ет2ксе3е -Кашапова Розалия Хазиевна.

*Номер* («А77оштар»)

1. А.Б. Бөгөнгө конференция тыуған төйәгебеҙгә – Туймазы еренә һәм ошо гүзәл төбәктә йәшәүсе яҡташтарыбыҙға арнала.

2. А.Б. Башҡортостандың көнбайышында урынлашҡан бәләкәй генә район һәм ҡала... Бик күптәр өсөн ул борон-борондан ата-бабаларынан ҡалған изге ер, аманат.

1. А.Б. бәрәкәтле Туймазы ере башҡа райондарҙан эшкә килеп, ғаилә ҡороп, ошонда төпләнеп йәшәүселәр өсөн дә тыуған төйәккә әйләнеп китә.

2. А.Б. Бөгөн ҡала һәм районыбыҙҙа төрлө милләттән эшһөйәр, уңған, алсаҡ кешеләр йәшәй. Улар араһында ябайлығы,уңғанлығы ихласлығы менән абруй яулаған милләттәштәребеҙ ҙә бар.

2. А.Б. Улар – ҡала һәм районыбыҙ үҫеүенә фиҙаҡәр хеҙмәт күрһәткән, беҙҙең өсөн өлгө булырлыҡ хөрмәтле ағайҙар һәм апайҙар.
Бөгөнгө конференция – уларға рәхмәт һүҙебеҙ.

1. А.Б. Ә хәҙер һеҙҙе Туймазы педагогия колледжының Туҙан телдӘр бҙлеге мөдире Фатихова З.С. сәләмләй!

*Номер*

2. А.Б. Хөрмәтле ҡунаҡтар, ҡатнашыусылар!
“Туймазы ере-эшһөйәрҙәр һәм илһөйәрҙәр иле” конференцияһын асырға рөхсәт итегеҙ.
Сәхнәгә *ҡунаҡтарҙы* саҡырабыҙ.

*Ҡунаҡтар. Конференцияны асыу*

1. Беҙ төрлө һөнәр кешеләрен беләбеҙ. Шулай ҙа эшселәрҙе лә, яҙыусыларҙы ла, хатта директорҙарға ла ҡасандыр уҡытыусылар уҡытҡан. Шуға күрә һүҙҙе уҡытыусылар хаҡындағы сығыштарҙан башлайбыҙ.

- Туймазы ҡалаһыны8 128 – се Занлы 30н2ри белем бире1 лицейы у7ыусы3ы Старков Вадим «32л2тле у7ытыусы» исемле докладлы мен2н сы4ыш я3ай, ет2ксе3е - ;ини2туллина Ф2йр1з2 Ми2сс2р 7ы6ы.

- Туймазы 7ала3ыы8 6-сы 3анлы м2кт2бе у7ыусы3ы Төхвәтуллина Розәлиәны алға са7ырабы6. Ул башҡорт теле уҡытыусыһы Ғәбдрәхимова Гөлназ Зәйтун ҡыҙы етәкселегендә “Нур сәсеүсе мөғәлимә” тигән доклад әҙерләгән.

2. Беҙҙең Туймазы район һәм ҡалаһы мәктәптәрендә бөтәһе –нән артыҡ башҡорт теле уҡытыусыһы эшләй. Улар үҙ эштәрен яратып башҡаралар, башҡорт телен үҫтереүгә ҙур көс һалаған мәктәп уҡытыусылары, бөгөнгө конференцияла

ҡатнашыусы студент һәм уҡыусыларҙын етәкселәре—урта махсус һөнәри белем биреү уҡыу йорттары уҡытыусылары.

1.Ошоға бәйле үҙебеҙҙең ТПК-ла эшләүсе уҡытыусыларыбыҙ хаҡында ла һүҙ әйтмәксебеҙ. Беҙҙе 3 башҡорт теле уҡытыусы у7ыта: Ғөзәйерова В.Ә, Фатихова З.С., Кәримова Гөлнара Яхъя ҡыҙы. Улар беҙҙең яратҡан уҡытыусыларыбыҙ, өлкән дуҫтарыбыҙ, кәңәшселәребеҙ.

2. Уҡытыусыларҙың хеҙмәте оло хөрмәткә лайыҡ Кнференциябыҙҙың дауам итеүсе Сәлимова Ләйсән дә ошо фекерҙе раҫлап, «Хыялым алға әйҙәне» доклады менән сығыш яһай. Ул —43сө һөнәрселек училищеһынан. Етәксеһе Ғәлимова Ләйсән Шамил ҡыҙы.

2. Туймазы 7алаһында баш7орт телен, рухын тергебе1се, 7ала тарихында онотолма9 э662р 7алдырыусы, ар6а7лы ш2хест2ребе6 байтаk. Шулар6ы8 бере3е – Хисмәтуллин Сәхи Нәби улы . Уны8 ха7ында Туймазы юридик колледжы студенты . Ғәфиәтуллина Гөлназ сы4ыш 26ерл2не. Ет2ксе3е- «хм26иева Резед2 Р1зил 7ы6ы.

1. Бе66е8 Туймазы 7ала3ы- Баш7ортостанда к0сл0 с2н242те мен2н 19ешк2н т062кт2р6е8 бере3е. ?ала заводтарыны8, предприятиелар6ы8 данын к1т2ре1се милл2тт2шт2ребе6 оло ихтирамға лайыk. Артабан4ы сы4ыштар улар ха7ында. Туймазы индустриаль техникум студенты ;абдрахманов Илшат « Ар6а7лы производство эшм2к2р62ре» исемле доклады менән сығыш я3ай. Ет2ксе3е- Кинй26улатова Алсу Азат 7ы6ы.

2. Алсу Азат 7ы6ы ет2кселегенд2 баш7арыл4ан та7ын бер хе6м2тте ты8лап 1т2йек. «;аил2 - бар башлан4ысты8 башы» доклады мен2н Шагиева «ли2 сы4ыш я3ай.

1.Кешене8 һаулы4ын һа7лау- яуаплы 32м етди хе6м2т. Был хе6м2тте намы9 мен2н баш7арыусы 7ала һәм районыбыҙҙы8 медицина учреждениеларында эшл21се х0рм2т 7а6ан4ан табиптарыбы6 бихисап. Улар хаҡында материалдарҙы Кашапова Эльмира Рим 7ы6ы ет2кселегенд2 Туймазы медицина колледжы студенты Латыпова Илһөйәр 26ерл2не. №16 уға бирел2. Доклад тема3ы - “Һаулыҡ һаҡлауға бағышланған ғүмер”

1. Кешене Рух йәшәтә, тиҙәр. Рухыбыҙ ҡороһа, юҡҡа сыҡһа ни булыр. Яуап ҡурҡыта. Һүҙебеҙ — рухи байлығыбыҙ һаҡсылары-мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре хаҡында. Туймазы ҡалаһыны8 7-се 3анлы м2кт26е у7ыусы3ы 32й6уллин Данис “Күңеле тулы моң ғына” исемле докладын ты8лайы7. Докладсы кесе булыуына 7арама9тан, т0рл0 саралар6ы8 актив 7атнашыусы3ы. М292л2н, бе66е8 колледжда 1тк2н «Й2шлек. Ф2н. М262ни2т.» республика 62йге3енд2 ул былтыр4ы йылда лингвистика 61легенд2 беренсе урынды алды. Ошондай 62л2к2й у7ыусыларыбы66ы8 булыуы кил2с2кт2 Туймазы 7ала3ында баш7орт рухы 7орома9, 19ер тиг2н 0м0тт2р уята. Ет2ксе3е -32й6уллина Мил21ш2 И6ел 7ы6ы.

2. !662рене8 таланты мен2н 7ала4а, Баш7ортостан4а, илг2 билд2ле я7таштарыбы6 бар. Туймазы педагогия колледжыны8 студенты Хамидова Регина «Таланттар4а бай Туймазы ере» доклады мен2н сы4ыш я3ай. Регина ла «Й2шлек. Ф2н. М262ни2т. » республика 62йге3енд2 7атнашты, уны8 сы4ышы рус теленд2. Ет2ксе3е - Исламова Асия Т2л42т 7ы6ы.

1. Туймазыны8 ар6а7лы ш2хест2ре ха7ында 316 алып бар4анда, 262би2тебе6 к1генд2 йондо6 булып бал7ы4ан я6ыусыларыбы66ы 2йтм2йенс2 м0мкин т1гел. Улар -телебе66е, м262ни2тебе66е, рухыбы66ы 19терелсел2р. Туймазы педагогия колледжыны8 студенты Х2мибуллина Динара доклады я6ыусылар ха7ында. Ет2ксе3е - К2римова Г0лнара Яхъя 7ы6ы.

2. Шулай итеп, конференцияға әҙерләнгән сығыштар тамамланды. Ысынлап та, Туймазы ере- эшh0й2р 32м ил30й2р62р иле. Б0г0нг0 конференция4а 26ерл2нг2н докладтар ошо фекерб6е та4ы бер мәртәбә и9батланы.

1. Тыуған ерем! Ҡуйынындан бәреләр
Батырҙарҙың эҫе тындары.
Ҡайнар күкрәгеңә бер hыйынhам,
Яҙылып та китә hындарым.

2. Тыуған ерем! Түгеп хәләл тирән,
Халkым hине гөлдәй иткән.
Ынтылам мин hинең бейеклеккә,
Ынтылам мин hинең киңлеккә.

1. Байрам бит ул — hауаларың hулап,
hуkмағындан тик бер үтеүҙәр.
Ниндәй бәхет, ниндәй сикhеҙ бәхет —
Ошо ерҙә тыуып-үҫеүҙәр!

Йыр.

2. Сараны йомғаklар өсөн hүҙ конференцияны ойоштороусы Кәримова Гөлнара Яхъя kыҙына бирелә.

Конференцияны тамамлау.

***52-се төркөмдә***
***Әсәйҙәр көнөнә арналған ата-әсәләр йыйылышы сценарийы***
***Декабрь, 2009 йыл***

*I өлөш. Концерт.*

1. Хәйерле көн hеҙгә, хәйерле көн,
Хәйерле көн, дуҫтар, туғандар.
Хәйерле көн hеҙгә, донья йөгөн
Йөкләп барған ирҙәр, уландар.

2. Хәйерле көн hеҙгә, сос kатындар
Донья күрке — изге әсәләр.
Хәйерле көн hеҙгә, эшсән kыҙҙар,
Ер биҙәге — алhыу сәскәләр.

1. Һаумыһығыҙ, беҙҙең хөрмәтле атай һәм әсәйҙәребеҙ, уҡытыусыларыбыҙ, курсташтарыбыҙ.

2.Иҫләйһегеҙме, 5 йыл элек, беҙ Туймазы педагогия колледжына уҡырға килергә тигән хәбәр алдыҡ. Беҙҙең нәҫелдә уҡытыусы була тип туған-тумасалар менән ҡыуандаҡ. Бергәләп кейемдәр йыйҙыҡ. Һеҙ тәмле-татлы ашамлыҡтар бешерҙегеҙ...

1. Колледжға бәйле төрлө матур хыялдар менән беҙ Башҡортостандың төрлө төбәктәренән йыйылдыҡ.

Улар – республикабыҙҙың бик матур тәбиғәтле, талантторға бай Бүздәк районында тыуып үҫкән ҡыҙҙарыбыҙ – Азаматова Ф. , Аскарова Э.,Талипова М.,Нигмәтйәнова И., Дистанова И., Фахрисламова Г., Кашапова И., Шагабутдинова И., (Салихова А.)(сығалар).

2. М. Аҡмулланы кемдәр генә белмәй икән? Данлыҡлы мәғрифәтсе шағирҙың яҡташтары, йәмле Дим һыуын эсеп үҫкән ҡыҙҙар Ғәниева З., Хәлиуллина И. (сығалар)

1. Төрлө милләт һәм киң күңелле халҡы менән бай Баҡалы районы ҡыҙы Милләтова Альбина. (сыға)

2. Башҡортостандың икенсе сигенән, сал тарихлы Баймаҡ районынан, - Ишморатова Гөлназ һәм Хөсәйенова Нәфисә. (сыгалар)

1. Егәрле игенселәргә бай ил Илеш районынан – Фәхретдинова Лариса.(сығалар)

2. Ут күршебеҙ ихлас күңелле Шарандан – Йосопова Гөлшат.(сыға)

1. Илебеҙгә күп шәхестәрҙе бүләк иткән Бишбүләк районынан – Садрисламова А. (сыға)

2. Һәм дә дәртле, көләс, эшҡыуарҙарға бай Туймазы районы һәм ҡалаһы ҡыҙҙары – Арсланбәкова И., Садыкова Р., Килмәмәтова З., Кучкарёва И., Салимянова Г., Солтанова Алина, Хәлфетдинова Л. (сығалар)

1. Бына ул беҙ! Һеҙҙең балаларығыҙ. Бөгөнгө көнгә тиклем уҡыуыбыҙҙа ярҙам итеүегеҙгә, терәк булыуығыҙға, Һеҙгә, ҡәҙерлеләребеҙгә, ҙур рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Һеҙ булғанда ғына беҙ көслө, теләһә ниндәй ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сыға алабыҙ, барыһын да булдырабыҙ!

2. Ошо йырыбыҙ – һеҙгә арнала, ҡәҙерле атай һәм әҫәйҙәребеҙ. (Ҡайтабыҙ ҙа китәбеҙ...)

Ҡайтабыз да китәбез.

1. Кайтабыз, әнкәй, яныңа,
Яшәсәк тә читтә без.
Кайтабыз да китәбез шул,
Кайтабыз да китәбез.

Кушымта: Кайтабыз да китәбез шул
Безне дә аңла инде.
Үпкәләп калсаң да, әнкәй,
Син рәнжеп калма инде...

1. Колледжда уҡыуыбыҙға 4 йылдан ашыу ваҡыт үтте. Уҡыуҙа төрлө саҡтар була. Юҡҡа ғына халҡыбыҙ уҡыу – энә менән соҡор ҡаҙыу тимәгән.

2. Ашарыңа етәме? Өшөмәйһеңме? Өй эшенде эшләнеңме? Экзамендарҙы нисек бирҙең, балам? Тырыш... Һеҙҙең иғтибарығыҙ беҙгә һәр ваkыт көс бирә.

1. Һеҙҙең өсөн Садрисламова Альбина бейеү башkара.

(Бейеү)

2. Беҙ һайлаған һөнәр – тел һәм әҙәбиәткә бәйле. Шуға күрә артабанғы номерыбыҙ әҙәбиәткә бәйле. Ҡыҙҙар үҙҙәре яратkан шиғырҙарын һеҙгә бүләк итә.

Шиғырҙар (Ишморатова Г, Шагабутдинова И Аскарова Э., СалимяноваГ.)

Ил яҙмышы – атай индәрендә,
Көн kарашы – атай күҙендә,
Балалары өсөн күңеле киң,
Ҡыйын сакта атай түҙем дә.
Атайҙарға маkтау һирәк, тибеҙ
Мохтажмы ни икән маkтауға?
Олпатлығы олпат көйө kала,
Киң күкрәге – дауыл kаплауға.
Атайҙарға шиғыр бик аҙ, тибеҙ,
Мохтажлы ни улар йыр-данга?
Сал тарихkа атай-олатайҙар
Юйылмаçлыk шөһрәт яҙғандар.
Атайҙар булғанда күңел тыныс
Тыуар көнгә ишек асkанда
Урман ситендәге имәндәрҙәй
Калkап булып алға баçkандар.

1. Йыр, моң шиғриәткә һөйөү, моғайын, ғаиләлә башланалыр. Әсәй һәм атайҙан. Бөгөн беҙ уларға ла һүҙ бирәбеҙ.

2. Иптәшебеҙ – Шагабутдинова Иринаның атаһы атаһы гармун уйнауға бик оçта. Хәлим ағай, беҙгә лә уйнап ишеттерһәгеҙсе!

Ҙур рәхмәт!

1. Әҙәбиәткә ғашиk атай, әсәйҙәребеҙ бар. Мәçәлән, курсташыбыҙ Сәлихова Алсуҙың әсәһе Азаматова Фәйрүзәнең атаһы, Милләтова Альбинаның ағаһы үҙҙәре шиғырҙар ижад итә. Гөлсиә апай, үҙегеҙ әçәрҙәрегеҙҙе беҙҙең kыҙҙарға ла уkып ишеттермәçһегеҙме икән?

1. Быйылғы йыл - Ғаилә йылы тип иғлан ителде. Ошо уңай менән бөтәгеҙҙе лә ғаилә бәхете, һаулыk, бөтмәç шатлыkтар теләйбеҙ. Киләһе йыл kыҙҙарыбыҙ уңышлы уkып бөтһөндәр. Һеҙгә тырышлыk, ныkышмалылыk теләйбеҙ.

2. Беҙҙең уkытыусыларыбыҙ ҙа ғаиләле. Һеҙгә, хөрмәтле уkытыусылар, өйөгөҙгә именлек, еңел булмаған эшегеҙгә уңыштар, ғаилә бәхете, үҙегеҙҙең балаларығыҙ игелеген күреүегеҙҙе теләйбеҙ.

1. Һәм бөтә ата-әсәләргә үҙ балалары менән kыуанырға, уларҙың kәҙер-хөрмәтен күреп йәшәргә насип итһен!

1. Оҙон-оҙон – нимә оҙон?
2. Оҙон-оҙон бәхет юлы.

Үҙ бәхетенә бара кеше
Ҡай ваҡытта ғүмер буйы.

Оло-оло нимә оло?
1. Ата-ана хаҡы оло
Онотмасын иде кеше
Үлгәнгә ҡәҙәр шуны.

Ауыр, ауыр, нәрсә авыр?

2. Ауыр әсәләр ҡарғышы.
Был ҡарғышты алғандарҙы
Көтә сак-сактар яҙмышы.

Йыраҡ, йыраҡ нәрсә йыраҡ?

1. Үткәннәргә юллар йыраҡ.

Бергә:
Ата-әсә фатихаһын
Ҡалайыҡ ваҡытында һорап!

Күмәк йыр «Балаларға фатиха»
Кошларга да канат үскәч,
Канатларга күәт кӳчкәч,
Калдыра бит туган оясын
Әткәй әнкәй өчен бала,
Һәр чак сабый булып кала
Язмышыгыз берүк аясын...

*Йыйылыштың 2-се өлөшө – әңгәмә.*

Быйылғы йыл - Ғаилә йылы. Ошоға бәйле беҙ һеҙҙе әңгәмәгә саҡырабыҙ. Быйылғы ғаилә йылында беҙҙең бер нисә ҡыҙыбыҙ ғаилә ҡороп ебәрҙе: Солтанова А.,Миллэтова А., Шафикова, Халфутдинова. Уларға иҫәнлек, татыулыҡ, бәхет теләйбеҙ.

Ошондай гүзәл һәм яуаплы мәл. Һәр ҡыҙ ғаилә хаҡында уйлай. Киләсәккә пландар ҡора. Бәхетле булаһы килә, һеҙҙең кәңәшкә мохтаж. Ошоға бәйле беҙ анкета һорауҙарына яуап бирҙек. Үҙебеҙҙең фекерҙәрҙе һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итәбеҙ. Был турала һеҙ нисек уйлайһығыҙ. Һеҙҙең менән уртаҡлашаһы килә.

*1-се һорау . Яратҡан егетең эсеү менән мауыға. Һин ни эшләйһең.*

Бер нисә ҡыҙ – ташлайым тигән. Ә күбенеһе былай тигән: Байрамда ғына булһа, өндәшмәйем. Әгәр ҙә гел эсһә, унын менән һөйләшеп ҡарайым, ярҙам ҡулы һуҙам. Нәтижәһе булмаһа, ташлайым. Йә мине, йә эскеһен һайлаһын.

Ата әсәләр, һеҙ ниндәй кәңәш бирер инегеҙ?

*2. Йәш сакта дуҫ егеттәр куп була бит инде ул. Кыҙҙарға шундай һорау бирелде. Яратkан егет бик куп аkсаға бай түгел. Эргәлә бай егет тә бар. Kайһыныһын һайлар инегеҙ?*

7 кеше конкрет байҙы тине. 11 кеше әгәр мөхәббәт булһа, ярлы егетте. Иң мөһиме – ул тырыш булһын. Сөнки бергәләп табылған байлыk kәҙерлерәк. Аkсаң булып та, мәхәббәт булмаһа, kыйынырак буласаk. 2 kыҙ кем булһа ла ярай. Иң мөһиме – ул мине яратһын. Донья kөтөрлөк булһын. Тырышkан кеше әҙер байҙан яkшыраk тигән афоризм да уйлап тапkандар.

Һеҙ килешәһегеҙме?

*3. Егеттең әсәһе (бейем,бианай) оkшамаһа, ни эшләргә?*

Яуаптар төрлөсә!

Ошо һүҙҙе нисек әсәй тип атаманылар икән? Иптәшемдең әсәһе ул миңә лә әсәй. Ул иптәшемде үҫтергән. Мин уға оkшарға тырышасаkмын.

Күптәр былай тигән: Нисек тә булһа уртаk тел табырға тырышам. Әммә үҙемде кәмһетергә юл kуймайым. Бик килеп сыkмаһа, түҙеп йәшәргә тура килә.

Унының менән осрашыуҙы «һирәгәйтәм». Ә Иптәшем минең яkлы булырға тейеш. Уға оkшарға тырышмаҫ инем. Сөнки кешене үҙгәртеп булмай.

Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ. Биянай менән килен араһында мөнәсәбәт ниндәй булырға тейеш?

*4. Тормош иптәше шундай сифаттарға эйә булырға тейеш. 3 сифатын әйтегеҙ.*

1. Уkымышлы, белемле – 14
2. Мине хөрмәт иткән, ярата белгән – 14.
3. Тырыш – 5. Эш һөйөүсән – 7. Ышанычлы – 3. Мине аңлаған – 3. Һау сәләмәт, көслө, кешелекле, эсмәгән, тартмаған, алға ынтылған, ғаиләне kайғырткан, бай.

*Атайҙар, һеҙ нисек уйлайһығыҙ?Һеҙ килешәһегеҙме?*

*5. Бәхетле ғаилә kороп өсөн, ниндәй шарт кәрәк?*

Бер-беренде аңлау, хөрмәт итеү, ғәфү итә белеү, туғандарға ярҙам итеп йәшәү, һәм уларҙың ярҙамын тойоу, 2-ең дә эшләүе, йәшәргә урын булыуы, дөйөм капитал булыуы, иҫәнлек-һаулыk. Миненсә, улар дөрөҫ әйтәләр. Шулай бит?

Аҙаkkыһы, хөрмәтле ата-әсәләр, студенттарҙан һеҙгә һорауҙар.

*1. Артабан уkырға теләһәң, ярҙам итерһегеҙме икән?*

*2. Нисә йәштә кейәүгә сығырға мөмкин тип уйлайһың*

*3. Нисек итеп ғаилә бәхетен оҙаkkа хәтлем һаkларға мөмкин?*

*4. Һеҙ бәхетлеме? Һеҙ үҙегеҙҙең тормошоғоҙ менән kәнәғәтме? Кире йәшлеккә kайтаһығыҙ, ошондай тормошто кире kайтарыр инегеҙме?*

*5. Беҙ һеҙҙең ышанысты аkлайбыҙмы? Һеҙҙең йөҙгә kыҙыллыk килтермәйбеҙме?*

*Һеҙҙең өмөтөгөҙҙө аkлармын! Һеҙгә ҙур рәхмәт...*

Һөйләшеүебеҙ тамамланыуға табан килә әңгәмә, kәңәштәр өсөн рәхмәт. Иң мөһиме- kыҙҙар күңелендә файҙалы kәңәштәрҙе үҙенә алһын.

Мин бөтәгеҙҙе лә етеп килгән Яңы йыл менән kотлайым.

Яңы йыл – Яңы kыуаныстар килтерһен, әммә иҫкеләре күңелдән китмәһен. Яңы йыл яңы маkсаттар, проблемалар өҫтәһен. Ә иҫкеләре хәтерҙә һаkланһын. Сөнки шуларҙы еңеү, хәл итеү аша беҙ көслөрәк була барабыҙ. Яңы йыл Яңы дуҫтар өҫтәһен. Әммә ошоға тиклем булған дуҫтар онотолмаһын!

Һеҙгә һаулыk, бәхет, kыуаныстар, тырышлыk теләйем.

Атай – әсәйҙәр, студенттар, күңелдәрегеҙ һәр ваkыт та шулай матур йәш булып kалһын. Сөнки йырҙа әйтелгәнсә,

Әле бит, әле генә
Иң матур мәле генә
Йәшәй башлағанбыҙ кеүек
Саk белеп тәмен генә.
Ишетәһегеҙме? Әйҙәгеҙ, күңелдәрҙе күтәреп алайыk әле.

(Йыр)

*Йыйылыштың 3-се өлөшө.*

1. Студенттарҙың уkыуы, дәрестәргә йөрөүе хаkында һөйләүе Кәримова Г.Я. һәм предмет уkытыусылары.
2. Сығарылыш дәүләт аттестацияһы хаkында. Уkыу-уkытыу буйынса директор урынбаҫары Әйүпова Э.Ш.
3. Төрлөһө.

## *С.Сафуановтың тыуыуының 80 йыллығына арналған хәтер кисәһе*

*(Туймазы районының Үҙәк-ара китапхана директоры Шәйҙуллина А.К. менән берлектә әҙерләнгән кисә)*

***Ноябрь, 2011 йыл***

1А.Б. Хәйерле көн kәҙерле дуҫтар, хөрмәтле kунаkтар, әҙәбиәт һөйөүселәр!

Асыk күңелле, ихлас һәм эш һөйөүсе кешеләр йәшәгән, гүзәл тәбиғәте менән күптәрҙе әсир итерлек бай, матур тыуған яғыбыҙ – Туймазы ере – оло ижадсылар тыуҙырған төбәк ул. беҙ бының менән һис шикһеҙ ғорурланабыҙ.

2.А.Б. Ошонда тыуып үҫкән, хәҙер инде буй-һыны, таҙа кәүҙәһе менән ғорур Урал бөркөтөн хәтерләтеүсе, сал сәсле башын һәр ваkыт юғары тотоусы, ирекле фекер йөрөтөргә һәләтле,тормоштағы һәр күренешкә, ваkиғаға әйтер һүҙе, үҙ kарашы булған ҙур абруйлы әҙәби тәнkитсе, әҙәбиәт белгесе, яkташыбыҙ Суфаян Ғаяз улы Сафуановkа 80 йәш булыр ине.

1 А.Б. . Әҙибебеҙгә бағышланған хәтер кисәһен башлар ебәрергә рөхсәт итегеҙ. Кисәгә Суфиян Сафуановтың kәләмдәштәре, журналистар, әҙәбиәт һөйөүселәр, kәрҙәштәре, туғандары килгән.

2. А.Б.

Донъя уны белеп яратkандыр
Тәбиғәттең алтын көҙөндә.
Кәрзиндәре тулы көҙ шикелле,
Матур булды ғүмере үҙе лә.

1А.Б. Әҙиптәр ҡартаймай ҙа, улар халыҡ күңелендә ҡалалар, уларҙың рухи хазиналары — аҡ ҡағыҙ биттәре мәңгелеккә йөҙ тота.

2 А.Б..Суфиан ағай Сафуановтың үткән тормош һәм хеҙмәт юлы һоҡланырлыҡ бай. Ул Туймазынан 25 саҡрым йыраҡлыҡтағы тау-соҡорҙарҙы, үҙ урманы, сылтырап ағып торған шишмәләре, ғәжәп хуш еҫле аландары, әкиәти Нөгөш йылғаһы булған, беренсе күреүҙә үк үҙенә ғашиҡ итерлек Бикмәт тигән күркәм һәм кескенә ауылда тыуған.

Беренсе белем усағы- Түбән Сәрдек ете йыллыҡ мәктәбе. Суфиан Ғаяз улы, күп әҙиптәр үрнәгендә, үҙ юлын эҙләп, Бөгөлмә педагогия училищеһына бара. Шунда белем алғанда уҡ, ул киләсәген әҙәбиәт донъяһына бағышларға тигән ныҡлы ҡарарға килә. Иманына, йәне дәшеүенә тоғролоҡло ҡалып, йәш егет Ҡазан педагогия институтына юл тота. Бында уҡыу сооронда ул үҙен эҙләнеүсән, тырыш шәкерт итеп таныта, Ғабдулла Туҡай исемендәге стипендияға лайыҡ була, аспирантура тамамлай.

1.А.Б. Казанда төплө белем алып ҡайтҡан йәш белгесте өфөлә СССР Фәндәр академияһы Баш-н филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына ғилми хеҙмәткәр итеп эшкә алалар. күп тә үтмәй, Суфиян Ғаяз улы башҡорт әҙәбиәте буйынса диссертация яҡлап, филология фәндәре кандидаты тигән ғилми дәрәжә ала.

1952 йылдан башлап Суфиян Сафуанов әҙәби тәнҡит менән шөғөлләнә, ошо өлкәлә ул күп һанлы монографиялар авторы.

Шулай уҡ Суфиян Сафуанов күренекле журналист булып танылa, татар телендә йәштәр журналы “Толпар”ҙы сығарыу өсөн дә ҙур көс һала. Суфиян ағай Башҡортостандың йәш татар яҙыусыларына аяҡҡа баҫырға ярҙам итә.

Йәш быуынды тәрбиәләү өлкәһендә лә матур уңыштарға ирешә. Суфиян Ғаяз улы Баш-н Дәүләт педагогия университетында татар теле һәм әҙәбиәте кафедраһы мөдире профессор вазифаларын башҡарҙы.

Әҙәбиәт фәне өлкәһендәге хеҙмәттәре өсөн Суфиян Ғаяз улы Сафуановҡа “Баш-дың атҡаҙанған фән эшмәкәре” тигән маҡтаулы исем бирелә.

Тик тыуған ер һәм туған тел ҡәҙерен белгән, тойған кеше генә ошондай ҙур уңыштарға эйә була алалыр ул.

2. А.Б. Кешеләр тауҙар шикелле-
Бейек булған һайын,
Тормоштары бәһәслерәк,
Яҙмыштары ҡыйын.
Мин дәрәжәне әйтмәйем,
Ул мәңгелек түгел.
Юғарылыҡты билдәләй
Тик юғары күңел...
-тип яҙҙы бөйөк шағиребеҙ Мостай Кәрим.

1.А.Б. Күңелендә, йөрәгендә тыуған ер һәм туған тел ҡәҙере — ошо ике оло тойғо айырылғыһыҙ итеп үрелгән халыҡтар дуҫлығы уҙаманы, абруйлы ғалим Суфиян Сафуановтың.

Быны дәлилләү өсөн уның хеҙмәтенә баһа биргән бер нисә ғалимдың һүҙҙәрен иҫкә төшөрөү урынлы булыр.

“ Суфиян Сафуанов башkорт һәм татар әҙәбиәтенең үҫеш проблемаларына бағышланған бер нисә китабы, күп һанлы мәkәләләре менән уkыусыларға таныш. Бигерәк тә, Али Карнай һәм Ибраһим Ғази тураһындағы монографиялары уны эрудицияле, һәләтле ғалим итеп таныттылар.”, - тип яҙҙы профессор Үзбәк Гимазиев.

Шулай уk Ҡазандан филология фәндәре докторы Әмир Мәхмүтов та Суфиян Сафуановтың туғандаш халыkтар әҙәбиәтен өйрәнеүҙәге ҙур эшен билдәләй.

2.А.Б. Ғалим хәҙерге проза, әҙәбиәт тарихы, башkорт әҙәбиәтенең туғандаш әҙәбиәттәр менән бәйләнештәре хаkында күп һанлы мәkәләләр баҫтырҙы. Ул Ғәйнән Хәйриҙең Боролош романын, Д. Юлтыйҙың Ҡан романының икенсе китабын табып баҫтырҙы, башkорт әҙиптәренең Ғ. Тукайға бағышланған әҫәрҙәренән торған Тукай Баш-да, туғандаш халыkтар шағирҙарының шиғырҙарын эсенә алған Сәләм һиңә, Баш-н , тигән йыйынтыkтар әҙерләп сығарҙы. Унының Али Карнай, Әнүәр Бикчәнтәев, Ғ. Хәйри, татар яҙыусыһы Ибраһим Ғази тураһында монографиялары айырым-айырым китап булып баҫылды.

1А.Б. Бөгөнгө башkорт һәм татар филологияһын Суфиян Сафуановтан башkа күҙҙаллау мөмкин түгел. Унын башkорт әҙәбиәте һәм яҙыусылары тураһындағы күп һанлы мәkәләләре Ҙур Совет энциклопедияһында, Әҙәбиәт энциклопедияһында, Лермонтов энциклопедияһында, Әҙәби энциклопедик һүҙлектә, Украин әҙәби энциклопедияһында урынлаштырылған.

Ғалимдың әҙәбиәт өлкәһендәге хеҙмәте Бирюков исемендәге Урал премияһы, Әнғәм Атнабаев исемендәге Баш-н премияһы менән билдәләнде.

Суфиян Ғаяз улы Сафуанов беҙҙең күнелдәргә әҙәбиәткә тоғролоғо, ғәҙеллеге менән гүзәл бер күпер һалыусы шәхес булып kалыр.

2 А.Б.. Яңы ғыа көләс яҙ йылмайһа,
Алтынланып көҙ килә,
Ниңә шулай, иҫкән ел шикелле,
Ғүмер тигәндәре тиҙ үтә...

Йылдар, йылдар...Уҙған ғүмерҙе иҫкән елгә, аkkан һыуға оkшаталар.Был ысынлап ташулай икән. Үткән йылдарҙың үренән kарағанда,барыһы ла асыkлана, буяҙар kуйыра, хәтерләүҙәр үткерләнә төшә...

1А.Б. Һүҙ – Башkортостан Яҙыусылар союзынан килгән kунаkтарға бирелә.

Ҡәҙим Аралбаев- Башkортостандың халыk шағиры С.Юлаев исемендәге премия лауреаты,

Күренекле прозаик, Баш-дың атkаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Сабир Шәрипов.

Марис Назиров – шағир , журналист, Башkортостандың матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре.

2А.Б.Хөрмәтле дуҫтар. Хәтер кисәһе ошоноң менән тамам. Иғтибарығыҙға ҙур рәхмәт. Һеҙгә ныkлы сәләмәтлек, бәхет, шатлыk, kыуаныстар, яңынан-яңы уңыштар теләп хушлашабыҙ. Киләһе осрашkанға тиклем һау булығыҙ.

**“Беҙҙең студент йылдары” гәзите презентацияһы**

*«Туймазы хәбәрҙәре» гәзитенең баш мөхәррире урынбаҫары*
*Фәзуллина Гәүһәр менән осрашыу*
***Март , 2012 йыл***

А.Б. Һаумыһығыҙ, ҡәҙерле дуҫтар, ҡунаҡтар, уҡытыусылар. Беҙ һеҙҙең менән өгөн ижад кисәһенә йыйылдыҡ.

А.Б. "Ижад донъяһына килеүсе һәр кемде уйландыра торған мәңгелек төшөнсәләр һәм ƙағиҙәләр, һәр кем кисерә торған тойғолар бар. Шуларҙан мин ғорурлыƙ һәм яуаплылыƙ тойғоларын айырым күрһәтер инем"- тип яҙған Рауил Бикбаев. Ысынлап та бөгөн беҙҙең осрашыуға үҙҙәренең эшенә яуаплы ƙараған, үҙенең тыуған теле һөм иле менән ғорурлана белеүсе ижад һөйөүсе студенттар йыйылған.

А.Б. Бөгөнгө беҙҙең осрашыуыбыҙҙың төп маƙсаты – ижад итеү серҙәренә төшөнөү, тәжрибә уртаƙлашыу һәм "Беҙҙең студент йылдары" гәзитенә ƙарата төрлө фекерҙәр, файҙалы кәңәштәр ишетеү. Осрашыуыбыҙҙы йәнләндереп китеү өсөн күңелле йыр тыңлап үтәйек әле.

А.Б. Рәхмәт Гүзәл. Бөгөн беҙҙең осрашыуыбыҙға бик ƙәҙерле ƙунаƙ килде. Ул- Фәзуллина Гәүһәр Йәүҙәт ƙыҙы – атаƙлы Ҡарамышевтар нәҫеленән. Уны Таңһылыу Ҡарамышеваның ƙыҙы тип әйтеү ҙә етә, беҙҙеңсә. Билдәле шағирәнең ƙыҙы булыу ҙа ҙур яуаплылыƙ өҫтәй һәм Гәүһәр Йәүҙәтовна һынатмай. Ул Өфөлә 20 –се башƙорт гимназияһында уƙый. БДУ-ның тарих факультетын тамамлай. Гәүһәр Йәүҙәтовнаны беҙҙең коллега әйтергә лә мөмкин, сөнки ул мәктәптә эшләп ала. Нәҫеленән килгән һөйөү уны гәзит эшенә ылыƙтыра. «Туймазы хәбәрҙәре» мәғлүмәт бүлегендә эшләй башлай. Һәм бына ун йыл ƙала һәм район халƙына һуңғы хәбәрҙәр, яңылыƙтар менән таныштырыу эше менән мәшғүл. Өҫтәүенә ул- баш мөхәррирҙең урынбаҫары. Шулай итеп, ƙәҙерле ƙунағыбыҙ Гәүһәр Йәүҙәт ƙыҙын сәләмләйек.

Ә кисәлә ултырыусылар – 42-се, 52-се төркөм студенттары, хөрмәтле уƙытыусыларыбыҙ – Гәлләмова Р.А., Әйүпова Э.Ш., Фатихова Ш.Х., Кәримова Г.Я.

Гәүһәр Йәүҙәт ƙыҙы, үҙебеҙҙең бүлек менән таныштырып китәйек. Бүлек асылыуға ун йыл тулып килә. Ошо арауыƙ эсендә әллә күпме студенттар тел һәм әҙәбиәт уƙытыусыһы исемен алып Башƙортостандың төрлө тарафтарына юлланды. Ниндәй генә бәйгеләр, саралар, кисәләр ойошторолманы! Улар беҙҙең күңелдәргә тик матур тәьҫораттар ғына ƙалдырҙы. Бер нисәһен һеҙ күрәһегеҙ.

Ысынлап та студент йылдары онотолмай. Ошо йылдарҙы иҫкә төшөрөү мәлендә, бәлки, фотоһүрәттәр ƙарар, телефондан курсташтарына шылтыратыр, гәзит биттәрен уƙыр. Ниндәй гәзит тиһегеҙме? Курсташтарыбыҙ сығарған «Беҙҙең студент йылдары» гәзитен.

Ә хәҙер һүҙҙе «Беҙҙең студент йылдары» гәзитенең мөхәррире Ләлә Моратшинаға бирәбеҙ. «Беҙҙең студент йылдары» гәзите йылына ике-өс мәртәбә сығып тора.Шул гәзитте сығарыуығыҙ хаƙында, нимәләр яҙыуығыҙ тураһында һөйләп үт әле Ләлә. (Моратшина Л)

Мәҡәләләр яҙыуы ауырмы тигән һорауға бишенсе курс студенты Илһөйәр Мөтигәллина яуап биреп китер.

Беҙҙә тик әҙәбиәт һөйөүсе студенттар ғына бар тип әйтеп киттек. Уларбуласаҡ уҡытыусылар, тимәк, ижад итеүселәр. Дәрес үткәреү, саралр ойоштороу – былар бөтәһе лә ижад. Биш йыл сығарыла килгән «Беҙҙең студент йылдары» гәзитендә лә уларҙың ижад емештәре баҫылып сыға килә. Ошо өс йыл ғүмер эсендә Туймазы педагогия колледжында үткән төрлө саралар тураһында мәғлүмәттәр, студенттарҙың ошо дәүер эсендә яҙылған шиғырҙары, мәҡәләләре, хикәйәләре урын алған. Бөгөн ҡайһы берҙәрен тыңлап үтәйек. Студенттар рәхим итегеҙ, һүҙ һеҙгә.

Әлбиттә, ҡыҙҙар һәм егеттәр был өлкәлә беренсе генә аҙымдар яһай. Кем белә, ҡайһы берҙәре бәлкем артабанғы тормошон журналистикаға бәйләр, кемдер бәйләмәҫ, әле буласаҡ уҡытыусылар ошонда алған белеме кәрәк булыр. Шулай ҙа беҙ гәзит сығарабыҙ, беҙгә был эш оҡшай. Һәм ошо гәзит буйынса файҙалы кәңәштәргә мохтажбыҙ. Һүҙ һеҙгә, Гәүһәр Йәүҙәтовна! Үҙегеҙҙең эшегеҙ тураһында, гәзитебеҙгә ҡарата кәңәштәрегеҙҙе әйтегеҙ. ( Фәзуллина Г.Й.)

Рәхмәт. Һеҙгә кисәлә ултырыусыларҙың һорауҙары барҙыр. Һорауҙар бирегеҙ.

Гәзитебеҙҙең бер һанында Алмаз исемле егетебеҙ менән таныштырып үткәйнек. Талантлы кеше бөтә яҡтан да талантлы, тиҙәр.Яңыраҡ ҡына башҡорт теле буйынса республика олимпиадаһында 2 –се урын алып ҡайтты. Бөтәбеҙгә билдәле: ул яҡшы йырлай ҙа. Һөйләшеүебеҙ кисәһенә уны саҡырҙыҡ. Ул беҙгә йыр бүләк итә.

Һөйләшеү тамамланыуға табан бара. Бөгөн һәр ҡатнашыусы фәһем алып ултырғандыр.Файҙалы кәңәштәрегеҙ өсөн Гәүһәр Йәүҙәтовна, һеҙгә ҙур рәхмәт. Һеҙгә халҡыбыҙ рухландырыр гәзит эшендә ҙур уңыштарға ирешеүегеҙҙе, шулай уҡ, ғаилә именлеге, һаулыҡ теләйбеҙ..Һәм ҡатнашыусылар, һеҙгә лә ижади уңыштар, илһам, уҡыу- эштәрегеҙҙә алға барыуығыҙҙы теләйбеҙ...

Хөрмәтле ҡунағыбыҙҙы сәй табынына саҡырабыҙ.

## *Мостай Кәрим шиғриәтенә арналған шиғыр уҡыусылар бәйгеһе сценарийы*

***Октябрь,2009 й.***

Алып барыусы: Хөрмәтле студенттар, ҡәҙерле уҡытыусылар!
Бөгөн, 20 октябрь, Башҡортостандың халыҡ шағиры М.Кәрим тыуыуына 90 йыл тула. Беҙ һеҙҙең менән ошо байрам айҡанлы шиғыр уҡыусылар бәйгеһендә йыйылдыҡ.

Бәйгелә ҡатнашыусылар I-IV курс студенттары, әҙерләүселәр – филология фәндәре буйынса уҡытыусылар Вәхитова Әминә Ғилметдин ҡыҙы, Кәримова Г., Нәсибуллина З., Тимошина З., Кадырова И. Шулай уҡ кисәбеҙҙә һәр ҡатнашыусының сығышын баһалаусы хөрмәтле жюри ағзаларын саҡырҙыҡ. Улар – Тимошина З.В., Ҡадырова И.Ф., Нәсибуллина З.Ә., Әйүпова Э.Ш.

Тәнҡитсе Ғ.Хөсәйенов билдәләүенсә, М.Кәрим ижадында өслөк принцибы йәшәй. Әҙәбиәттең өс төрө – поэзия, проза, драматургия – уның

ижадының өс тағаны. Ә бына М.Кәрим иң беренсе сиратта үҙен шағир тип иҫәпләй. Ул хатта проза, драматургия өлкәһендә лә шағир булып ҡалам, ти. Ысынлап та, М.Кәрим шиғриәте иҫ китмәле ғәжәйеп бер донъя, ә шағир үҙе беҙҙең өсөн буй етмәҫлек оло әҙип булып күренә. Бына шул шиғыр донъяһының ҡайһы бер аҫыл өлгөләрен беҙ кисәбеҙҙә тыңлап үтәсәкбеҙ. Беренсе шиғыры «Үндым» тип атала. Ураҡова Нурсиләне алға саҡырабыҙ.

Ураҡова Нурсилә сығыш яһай.

- Рәхмәт Нурсилә. Шағир үҙенә үҙе һорау бирә: Минән унды микән бүтәндәр? Беҙ, әлбиттә, ғорурлыҡ менән эйе, ундыҡ, тип ышаныслы яуап бирәбеҙ. Халыҡ кеше тураһында шулай тип әйтһен өсөн, унан ҙур көс, ныҡышмалыҡ, рух ныҡлығы һәм бик күп нәмәләр талап ителә. Быға ғаилә, мөхит, мәктәп, дуҫтарҙың йоғонтоһо ҙур. Уларҙың бөтәһенә лә рәхмәтле шағир. Мәҫәлән, үҙенең уҡытыусыһына.

Шагабутдинова И. «Уҡытыусыма» шиғырын уҡый.

- Рәхмәт.

Яҙмыш М.Кәримгә бик күп һынауҙар әҙерләй. Мәҫәлән, 1941-1945 йылдарындағы Бөйөк Ватан һуғышы. Йәш шағир үҙенең ғаиләһен ҡалдырып, беренселәрҙән булып фронтҡа китә һәм башҡаларҙы ла әйҙәй. «Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!» шиғырын Ниғмәтуллина Д. уҡый.

Һуғышта шағирға бик күп нәмәләрҙе күрергә тура килә — Яуҙарҙы, үлемде, батырлыкты, ҡурҡаҡлыкты, дошманды, ҡолдарҙы.

Милләтова А. «Ҡол ҡыҙ йыры» шиғырын уҡый.

Ураҡова Л. «Ҡара һыуҙар» поэмаһынан өҙөк уҡый.

«Русская девочка» шиғырын Фәррәхова А. һөйләй.

Һуғыш бөтә, шатлыҡлы еңеү менән һалдаттар Тыуған илгә ҡайта. Тыуған ер, ил, туғандар уларҙы һағынып көтәләр. Хатта гөлдәр ҙә... «Һаумы, тиҙәр гөлдәр». Был шиғырҙы Асҡарова Э. уҡый.

Һуғышта ҡатнашҡан кеше бер ҡасан да был көндәрҙе онотмайҙыр. Бер яҡтан — һуғыш хәтирәләре, икенсе яҡтан яралар тыныслыҡ бирмәй. Теләүбаева Эльмира «Осөнсө көн тоташ ҡар яуа» шиғырын уҡый.

Беҙҙең илебеҙҙә бик күп тетрәнеүҙәр була. Мәҫәлән, Советтар Союзы тип аталған илебеҙ тарҡала башлай. Әммә ниндәй генә ваҡиғалар булмаһын, М.Кәрим позицияһы үҙгәрмәй, ныҡ. Ул — үҙ Тыуған илен һөйөүсе, Башҡортостандың, Рәсәйҙең ысын улы, патриоты булып ҡала.

Зәйҙуллин И. «Россиянмын» шиғырын уҡый.

Ә хәҙер Китова А. «Я Россиянин» шиғырын һөйләй.

Зәйнуллин Радикка һүҙ бирәбеҙ. «Ҡайын япрағы тураһында».

М.Кәрим шиғырҙарын бөтә кеше лә ярата. Ул үҙе лә бит һәр бер кешегә әйтер һүҙем бар, ти. Бәлки, шуғалыр ҙа...

«Ҡоштар осорам» шиғырын Ибраһимова Ю. уҡый.

Шағирҙың шиғриәтендә, тормош, яҙмыш, йәшәү һәм үлем, кеше хаҡында фәлсәфәүи шиғырҙары байтаҡ.

«Кеше» шиғырын Ғибәҙуллина А. уҡый.

Беҙ беләбеҙ: бөйөк рус шағиры А.С.Пушкин көҙ миҙгелен яратҡан, ул көҙгө тәбиғәттән илһам алған. Әллә ошо миҙгел осоронда тыуғанғамы, М.Кәрим дә был миҙгелде үҙ итә: «Көҙгө Дим ярында», «Быйылғы көҙ

шундай сыуаҡ ине», «Ер йөҙөндә һап-һары көҙ» шиғырҙары шуны иҫбат итә.

Ә 12-се төркөмдән Азаматова Ф. «Көҙгө урман» шиғырын уҡый.

Мөхәббәт! Ул ниндәй генә шағирҙы илһамландырмай һәм моңландырмай икән? М.Кәрим дә ғүмере буйы ҡатыны Рауза ханыма бағышлап шиғри әҫәрҙәр ижад итә. Уларҙы уҡып, бөгөнгө йәштәр үҙ мөхәббәттәре тураһында уйлай.

Сәйетова Р. «Яҡты төн» шиғырын уҡый.

Һеҙ бөйөк кешеләрҙе нимәләр менән сағыштыраһығыҙ? Ә М.Кәрим уларҙы бөйөк һәм ғорур тауҙарға тиңләй. Тимерғәлина Ританың уҡыясаҡ «Тауҙар» шиғыры шуның хаҡында.

Ә бит шағир үҙе лә беҙҙең өсөн бейек тау кеүек!

Шулай итеп, Башҡортостандың халыҡ шағиры М.Кәрим – яҡты талант, шиғриәтле натура икәнен беҙ бөгөн тағын да күрҙек, инандыҡ. Уның шиғриәте яҡты йондоҙ булып бик күп быуындарҙы илһамландырыр, һоҡландырыр, рухландырыр тигән һүҙҙәр менән бәйгене тамамлайбыҙ.

Жюриҙең йомғаҡлауы, баһалауы.